✓Һәр яңы көн беҙгә яңы яҙғы миҙгел кеүек бирелә. Уйҙарыбыҙ, эштәребеҙ, хыялыбыҙ һәм бөгөнгө тырышлығыбыҙ иртәгәге уңышты тәьмин итәсәк. Бөгөн бирелгән мөмкинлекте файҙаланмау - ул якты һәм яхшы киләсәкте алыҫлаштырыу тигән һүҙ. Бөгөнгө көндө уйың менән кисәгене ҡабатлау йә иртәгәне көтөү өсөн файҙаланма. Эште башлау өсөн бөгөндән дә якшыраҡ көн юҡ.


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

6-12 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2009 ЙЫЛ

№23 (337)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Дуҫың нindәй - ҡәҙерең шундай,**




2

**Теләһәк...**




5

**Ырымбур губернаһы топографияһы**




6

**Башҡортостандың мәңгелек һәйкәле,**

йәки Халыҡтар дуҫлығын тарих үҙе тыуҙырған



8-9

**ТВ программа**

14


## ӨФӨБӨҘГӘ КИЛӘ БАЙРАМ, БАРЫҒЫҘҘЫ ИТӘБЕН ХАЙРАН!



### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## XXI быуатта баш ҡалабыҙ Өфөнө нисегерәк итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?

*Закирйән ӘМИНЕВ, тарихсы:*

-XXI быуатта мин Өфөнөң архитектура йөһәтенән дә, демографик яктан да ысын мәғәнәһендәге башҡорт ҡалаһы булыуын теләйем. Башҡортостандың баш ҡалаһы тап шундай булырға тейеш тә. Әлбиттә, үткән быуаттағы Өфө менән хәҙерге Өфө араһында айырма күп, ул йөһәттән баш ҡала алға китте. Элекке "шырпы ҡаптары" төҙөлмәй баш ҡалабыҙҙа. Төҙөләндәрендә лә башҡорт милли һыҙатын күберәк тойғо килә.

Ҡаҙағстандың Еҙкаҙған, Ҡарағанда ҡалаларында булырға тура килгәйне. Унда 8-9 ҡатлы йорттар тас ҡаҙаҡтың ер өйө - землянкаһына оҡшатып эшләнгәйне. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ, туғыҙ ҡатлы землянка. Землянкаға оҡшаған булһа ла - ҡаҙаҡтыҡы. Өфөлә лә башҡорт тирмәһенә оҡшаған йорттарҙы күрге килә. "Өфө-арена" спорт һарайы, мәҫәлән, тирмәгә оҡшатып эшләнгән.

*Ташбулат УСМАНОВ, Әбйәлил районы:*

-Ҡаланың тышҡы йөҙө, архитектураһы милли төҫ алырға, унда башҡорт мәктәптәре, гимназиялары, уҡыу йорттары артырға тейеш, тип кенә әйтһәк, тулы яуапты алған булыр инек. Әммә былар барыһы ла тик тышҡы үҙгәреш - форманың үҙгәреше генә булыр ине. Ни өсөн тигәндә, беҙ XXI быуаттың мәғлүмәт, интеграция, глобалләшеү, урбанизация быуаты булараҡ, беҙҙең алға ниндәй һынауҙар ҡуйырын әле күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Иң мөһиме: XXI быуатта тап урбанизация һөҙөмтәһендә милләтебеҙҙең 75 проценттан ашыу өлөшө ҡалаларға күсеп бөтәсәк. Баш ҡала булараҡ, Өфөлә был нисбәт күпмерәкте тәшкил итер икән? Киләсәгебеҙҙе ана шул нисбәт тә билдәләйәсәк.

*Рудоль ӘЙСӘХОВ, архитектор:*

Күптәр хәҙерге ҡалаларҙы күп ҡатлы йорттар аша күҙ алдына килтерә. Минеңсә, хәҙерге ҡалаларға йәшеллеккә күмелгән киң проспекттар, киң урамдар хас булырға, йәғни улар тәбиғәт менән гармонияла булырға тейеш. Милли үҙенсәлеккә килгәндә, әлбиттә, киләсәктә мин Өфөбөҙҙә тирмәне хәтерләткән йорттар күрергә теләр инем. Йорттарҙың тышҡы йөҙө, формаһы ғына түгел, уның эске ойошторолошо ла милли йөкмәткеле, йәғни тирмә эсе һымаҡ иркен булырға тейеш. Был башҡорттоң менталитетына тап килә. Шулай уҡ баш ҡалала милли батырҙарыбыҙға, шәхестәребеҙгә, Урал батырға монументаль һәйкәлдәр күрергә теләр инем. Улар Салауат батыр һәйкәле кеүек булырға, урынлашҡан урыны менән дә йәлеп итеп торорға тейеш.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

### ИҒТИБАР!

## ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫБЫҘ!

Гәзитебеҙгә быйылғы икенсе ярты йыллыҡҡа яҙылыу тамамланып килә. Почталарға ашығығыҙ! Баҫмабыҙҙың һеҙҙе рухлы ла, сәмле лә, ғәмле лә итерәнә иманыбыҙ камил. 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **294 һум 84 тингә, 50673** индекслыһына (льготалыһына) **282 һум 66 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә матбуғат киоскыһында яҙылыу һеҙгә ярты йылға **240 һумға** төшәсәк, унда бер йылға ла яҙылып була.
- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа унайлы һәм арзан: ул һеҙгә ярты йылға **225 һумға** ғына төшәсәк.
- Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән (кәмендә 20 дана, бер йылға һәр данаһы **324 һум 84 тин**) яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк.

## ЙӘ, КЕМДӘР АҠСАҺЫН...

Бөгөн иң күп гәзит уҡыусылар кемдәр, беләһегеҙме? Әлбиттә, һәр ваҡыттағыса, ауыл кешеләре. Айҙан-айға эш хаҡы алып эшләү бәхете лә бик аҙҙарына ғына тейә уларҙың, ә шулай ҙа гәзиткә яҙылыу мөмкинлеге табалар. "Быны, баҙарға сығарып ҡаймаҡ, эремсек һаттым да, гәзитегеҙгә яҙыла һалып, квитанцияһын һеҙгә ебәрәм", - тип яҙғайны Әлшәй районынан Сәбилә Латипова. Ауылдағы уҡыусыларыбыҙҙың күбеһе бына шулай рухи азыҡтан айырылмау яйын таба. Ҡала кешеләре кеүек, аңды томалай, фекерләүҙе үлтерә торған телевизорға, компьютер уйындарына алыштырмаған әле улар гәзитте, китапты.

Нимә әйтергә теләйбеҙме? Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, тыуған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарыбыҙ һәм рәхмәт уҡыр. Әйҙәгеҙ, ҡушылығыҙ ошо "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына. Йә, кемдәр йәлләмәй 294 һум аҡсаһын? Йә, кем бер тапҡыр ғына бер кило колбаса, йә бер кило кәнфит ашамай тора ала? Акцияға ҡушылыуығыҙ тураһында беҙгә хәбәр итергә онотмағыҙ!

**Әйткәндәй, ошо арала БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Зөфәр Еникеев, Венера Шәрәфетдинова, шулай уҡ гәзитебеҙҙең дуҫы Динир Әхмәтйәнов ауылдағы туғандарына өсәр дана "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырҙы. Рәхмәт яуһын уларға!**



✓ *Улар күпмелер ваҡыт дуҫ булып йөрөгәндән һуң, ике яҡтың да холоҡ-фиғелдәре мөмкин тиклем асылғандан һуң, дуҫтар бер-береһен юғалтмаҫ өсөн ике күҙен дә йоморға тейеш булып сыға.*



МӨҒЖИЗӘ БИТ!

# АЛЕКСАНДР II БИРГӘН ХОҠУҠ

**1872 йылда "сумаҙан" муллалары шикәйәте буйынса Зәйнулла ишан Рәсүлев хөкөм ителә һәм Вологда төрмәһенә оҙатыла. Бер ниндәй дарыуһыҙ ауырыуҙарҙы һауыҡтырыу көсөнә эйә булған Зәйнулла ишандың даны тиҙ арала губернаторға етә.**

Был иҫ киткес һәләткә эйә булған кеше менән ҡыҙыҡһыныуы Вологда губернаһы губернаторы генерал-лейтенант С.Ф. Хоминскийҙы 1875 йылда төрмәгә алып килә. Губернатор менән ишандың араһында әңгәмә була. Был һөйләшеү нимә хаҡында барғандыр, уныһы билдәһеҙ, әммә әңгәмәнең аҙағында губернатор ишандан лекарҙар өмөтһөҙ тип тапҡан ҡыҙы Алинаны һауыҡтырыуын үтенеп һорай. Губернатор С.Ф. Хоминский православие дине яҡлы булһа ла, ҡатыны һәм балалары рим-католик динен тота. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, губернаторҙың ишанға мөрәжәғәт итеүе ҡыҙының һаулығы сиктән тыш насарайыуы менән аңлатылалыр. Һәр хәлдә, Зәйнулла ишан ҡыҙҙы бер нисә тапҡыр өшкөргәндән һуң, Алина һауыға.

1878 йылда Хоминский артабанғы хеҙмәт урынына - Генеральный штабҡа тиклем үрләтелә һәм Император Александр II Ғәли Йәнәптәре мөхитенә эләгә. Күрәһең, башҡорт шәйехе Зәйнулла ишан Рәсүлев хаҡында Александр II С.Ф. Хоминскийҙан ишетеп белгәндер, сөнки императорҙың күрһәтмәһе буйынса Зәйнулла Рәсүлевты батша һарайына алып киләләр. Кавказға һәм Урта Азияға экспансия алып барған, бер үк ваҡытта Төркиә менән һуғышҡа әҙерләнгән Александр II ишандан Ислам хаҡында күберәк мәғлүмәт белергә теләгәндер тип уйларға ла була бында. Зәйнулла ишандың үҙе һөйләүе буйынса, Александр II уға намаҙ уҡый торған бүлмәне күрһәтә, унда намаҙлыҡ йәйелгән була, Ҡөрьән китабы ла ята. Батша унан намаҙ уҡыу тәртибен һораша, башҡарып күрһәтеүен үтенә, мосолман булыр өсөн ниндәй ғәмәлдәрҙе башҡарыу кәрәклеген һораша. Император менән осрашҡандан һуң Зәйнулла ишан Рәсүлевтың төрмәлә йәшәү шарттары яҡшыра төшә: уға дини китаптар менән шөғөлләнеү, Ислам принциптары менән йәшәү хоҡуғы бирелә.

**Әйткәндәй...**

**1881 йылда Вологда губернаһы губернаторы Л.И. Черкасов Александр II күрһәтмәһе буйынса Зәйнулла ишан Рәсүлевтың юлына ылау, аҙыҡ-түлек, аҡса һәм дини китаптар биреп, тыуған еренә - Башҡортостанға тиклем оҙатып ҡуйыу хәстәрлеген күрә.**

Сәғит хажи ИСМӘҒИЛЕВ.

ПАРАДОКС



# ДУҪЫҢ НИНДӘЙ - ҠӘҘЕРЕҢ ШУНДАЙ,

## йәки Ике дуҫтың береһе - ҡол...

**Дуҫлыҡ хаҡында ниндәй генә ҡанатлы һүҙҙәр, тәрән мәғәнәле мәҡәл-әйтемдәр юҡ. Әйтәйек, "Кемлегенде дуҫыңа ҡарап әйтермен", "Айырылмаҫтай дуҫыңа ҡайырылмаҫтай һүҙ әйтмә", "Алдаҡсы дуҫың булғансы, ысын дошманың булһын", "Алйот дуҫтан аҡыллы дошман артыҡ", "Ата-бабаң дошманын үҙеңә дуҫ итмә", "Боҙолошҡан дуҫ дошмандан яман", "Ғәйепһеҙ дуҫ эҙләгән дуҫһыҙ ҡалыр", "Дуҫың ниндәй - ҡәҙерең шундай", "Ике дуҫтың береһе - ҡол" һ.б.**

**Минеңсә, ысын дуҫлыҡ булған ерҙә "дуҫлыҡ" тигән һүҙ әйтелергә лә тейеш түгелдер. Һәр хәлдә, ысын дуҫлыҡ бындай аңлатма-атамаға мохтажмы икән ни? Хәйер, һыуҙы бер ваҡытта ла "еүеш һыу" тип атамайҙар бит. Икмәк ондан яһала тип тә әйтмәйҙәр. Шуның кеүек. Беҙ иһә, совет заманында был һүҙҙе лозунгыға әүерелдереп, урынлы-урынһыҙ ҡулланып, "дуҫлыҡ"ты әҙәм ҡараһығыҙ тәҫкә әйләндерҙек. Ҡәҙере китте, бәҫе төштө ул һүҙҙең. Кешеләр араһында ихлас мөғәмәлә, ысын дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре кәмей барған һайын, "дуҫлыҡ" тигән һүҙ күберәк яңғыраш ала, шаблонға әйләнә башланы. Ни өсөн шулай һуң? Шул хаҡта фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Дөрөҫөн әйткәндә, шәхесара, милләт-ара, дәүләт-ара мөнәсәбәттәрҙе башҡаса атап булмаған саҡта йә башҡа төрлө ҡулайлы эпитет тапмағанда ҡулланалар был дежур һүҙҙе. Бөкхетте ул һүҙ. Берәү былай ти: "Минең дуҫтарым иҫ киткес күп, ҡайҙа ғына бармайым, улар мине ҡолас киреп ҡаршы ала, йортона индереп, ҡунаҡ итә, оҙатып ҡала. Бар урында ла дуҫтарым булғас, йәшәү ҙә рәхәт, еңел, үҙемә кәрәкле әйберемде оҙаҡ эҙләп йөрөмәйем, шундуҡ табам. Йәшәү рәхәт донъяла дуҫтар булғанда, һ.б." Әммә ошолай тип әйткән кеше менән яҡынданыраҡ танышһаң, уның шунсама кеше араһында яңғыҙ булғанын да аңлап алаһың. Телгә генә күсә икән ғәмәлдә булмаған дуҫлыҡ. Йәки булмаһа, ошо һүҙҙәрҙе әйтеүсе кеше ҙур һәм мөһим генә урында эшләп йөрөгән кеше булып сыға һәм уның, бар урында ла мине ҡолас йәйеп ҡаршы алып, оҙатып ҡалалар, тигәне уның үҙенең башҡаларға кәрәк булыуынан килеп сыға. Ундайҙар башҡаларға кәрәкле кеше булыуҙан туҡтағас, дуҫтары ла ҡапыл ҡайҙалыр һибелеп юҡҡа сыға. Ошонан сығып, беренсе ҡағиҙә: "Кемгәлер кәрәкле булғаның өсөн генә һин ул кешегә дуҫмы? Кәрәгең ҡалмағас, һин уның дошманына әүереләһеңме инде?" Парадоксмы? Парадокс...

Ваҡытында күренекле яҙыусы Рәшит Солтангәрәевтың "Ике дуҫтың береһе ҡол була" мәҡәләһе йәмғәтселектә ҙур резонанс тыуҙырғайны. Уның шауҡымы хәҙер ҙә тойола. Был мәҡәләһендә автор Башҡортостанда милләт-ара мөнәсәбәттәргә туҡталып, башҡорт милләтенең башҡа милләт вәкилдәрен үҙенә һәр саҡ дуҫ күреүе һәм ошо дуҫлыҡ хаҡына милләтебеҙҙең "кол хәләнә" ҡала барыуы хаҡында әсенеп яҙғайны. Бик ваҡытлы һәм урынлы булғайны ул мәҡәлә. Рәшит ағайҙың ошондай сетерекле мәсьәлә буйынса ул саҡтағы ҡыйыулығына әле бер ҡәләм эйәһе лә етә алғаны юҡ әле. Ниндәй һүҙ, фекер иркенлеге заманы килһә лә. Хәйер, амбразура ҡапланды инде, икенсеһе уны ҡабатлау ғына буласаҡ. Барыһы ла был батырлыҡты Шакирйән Мөхәммәтйәнов-Александр Матросов яһаған тип белә.

Был йәһәттән яҙыусының "Башҡорт менән татар" хикәйәһе лә сәптең унлығына атыу булғайны ул саҡта. Был хикәйәне хәҙер ҙә басып сығар, бөгөн дә актуаль буласаҡ.

Ысынлап та, ни өсөн ике дуҫтың береһе ҡол була һуң? Был һүҙҙәр бит Рәшит ағайҙыҡы түгел, халыҡ әйтеме. Уның мәғәнәһенә ҡарағанда, дуҫтарҙың береһе һәр саҡ үҙенең мәнфәғәтен икенсе планға ҡуйып, үҙлегенән сигенеп, дуҫлыҡ хаҡына үҙен ҡорбан итеп йәшәргә тейеш булып сыға түгелме? Ошоларҙан сығып, икенсе ҡағиҙә: "Ике дуҫтың береһе ҡол булғанда, ҡол менән ҡол биләүсе мөнәсәбәтен дуҫлыҡ тип атап буламы?" Парадоксмы? Парадокс...

Бер аҡыл эйәһе "Әгәр ҙә дуҫ тапҡың килһә, бер күҙеңде йом, уны юғалтмайым, тиһәң, икеһен дә йом", тигән. Был һүҙҙәрҙең артында ниндәй мәғәнә ята һуң? Эйе, донъяла бар яҡтан да камил, идеаль кешеләр булмай. Һәр бер кешенең үҙе генә һәм яҡындары ғына белгән кире, етешһеҙ яҡтары була һәм үҙенә дуҫ һайлаусы кеше идеаль кеше табырға тырыша икән, бөтөнләй дуҫһыҙ тороп ҡалыуы бар. Шуға күрә лә ул, теләймеюҡмы, дуҫы булырға тейешле кешенең кире, етешһеҙ яҡтарын күрмәҫкә тырыша йәғни бер күҙен йома. Улар күпмелер ваҡыт дуҫ булып йөрөгәндән һуң, ике яҡтың да холоҡ-фиғелдәре мөмкин тиклем асылғандан һуң, дуҫтар бер-береһен юғалтмаҫ өсөн ике күҙен дә йоморға тейеш булып сыға. Ошоларҙан сығып, өсөнсө ҡағиҙә: "Бер-береһенең кире яҡтарын күрмәҫкә тырышып, ике күҙен дә сытырҙатып йомоп, маңлай күҙҙәре менән бер-береһенә ҡарап тороусы был икәүҙе дуҫ тип атап буламы икән?" Парадоксмы? Парадокс...

**Әйткәндәй...**

**"Дуҫың ниндәй - ҡәҙерең шундай", тип тә әйтелә халыҡ мәҡәлендә. Беҙҙә ҡәҙер итмәүсе "дуҫтарыбыҙ" яйы сыҡҡан һайын ҡулыбыҙҙы тешләргә әҙер тороусылар үҙҙәренең ниндәй икәнлектәре хаҡында беләме икән?**

Әхмәр ҮТӘБАЙ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү институты" дәүләт учреждениеһына Монголиянан "Шаамарын тахой" кооперативы хеҙмәткәрҙәре хеҙмәттәшлек визиты менән килде. Улар институттан 600 бал ҡорто пакеты һәм 150 инә бал ҡорто һатып аласаҡ, Монголияла боронғо ҡортсолоҡ шөғөлөн тергеҙеүгә беҙҙең бал ҡорттары ла үҙ өлөшөн индерәсәк. Башҡорт дәүләт аграр университетында Монголия өсөн умартасылар әҙерләү мәсьәләһе лә тикшерелә.

✓Октябрьский ҡалаһында ЮНЕСКО-ның халыҡ музыка ҡоралдарында уйнау йолаларын үҫтереү буйынса программаһы сиктәрендә ойошторолған сираттағы ҡурай байрамы булып үтте. Бәйгелә 160-лап ҡурайсы ҡатнашты. Төп призды Ғафури районынан Рәмил Ҡотдосов яуланы.

✓9-12 июндә Башҡортостанда "Берҙәмлек" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале буласаҡ. Сара халыҡ ижадын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен популярлаштырыу, Рәсәй һәм сит ил ижади коллективтары менән бәйләнештәрҙе нығытыу маҡсатында үткәрелә. Фестивалдә Рәсәйҙән һәм сит илдәрҙән биш йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашыуы көтөлә. Программала ете байрам концерты - Фәтих Ихсанов исемендәге призға гармун байрамы, "Берҙәмлек" фестивален тантаналы асыу, Борай районында һабантуй, Башҡортостан ҡалалары буйлап фестиваль туры, Нефтекама ҡалаһында фестивалдең гала-концерты, карнавал һәм йәрминкәләр саралары үткәреү ҡарала.

✓Өфө дәүләт авиация техник университетында көндөҙгө бүлектең беренсе курсына бюджет нигеҙендә уҡырға ҡабул итеү өс йөҙ урынға арттырылды. Университеттың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, быйыл беренсе курсҡа барлығы мең ярым студент бюджет нигеҙендә ҡабул ителәсәк. Шулай уҡ магистратураға һәм аспирантураға уҡырға инеүселәр өсөн дә түләүһеҙ урындар арттырылды. Рәсәй Федерацияһының Мәғариф һәм фән министрлығы беренсе курсҡа ҡабул ителеүселәр өсөн бюджет урындарын ҡыҫҡартмаҡсы ҡарар итте. Был, әлбиттә, гуманитарийҙарға, экономистарға һәм буласаҡ педагогтарға ҡағылмай. Инженерҙарға һәм тәбиғи фән өлкәһе белгестәренә быйыл да өҫтөнлөк бирелә.

*✔ Хәҙер Премьер-министрыбыҙ аҙнаһына бер тапҡыр бәләкәй ҡалалар буйлап йөрөп, ундағы мөлкәт хужаларын елкәләренән алып, эшселәргә эш хаҡын түләргә мәжбүр итер микән?*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# КИЛДЕ. КҮРҘЕ. ЕҢДЕ.

## Владимир Путин бер көн эсендә бер ҡаланың яҙмышын хәл итте

**Пикалево тигән ҡаланы беләһегеҙме, йәмәғәт? Белмәһәгеҙ - белегеҙ. Рәсәйҙә шундай ҡала ла бар икән. Ул Ленинград өлкәһендә урынлашҡан. Санкт-Петербург ҡалаһынан 200 саҡырым алыҫлыҡта. Кешеләре лә күп түгел - 22 мең самаһы. Ҡаланың эргәһендә генә Яңы Ладога - Вологда федераль трассаһы урынлашҡан. Ә ҡаланың үҙендә бер түгел, өс сәнәғәт предприятиеһы бар - "Пикалёво балсыҡ заводы" ("Базэл-Цемент" компанияһы) "Пикалево цементы" ("Евроцемент групп" компанияһы) һәм "Метахим" компанияһы. Улар бер-береһе менән тығыҙ бәйле. Был заводтарҙа ҡаланың эшкә яраҡлы барлыҡ халҡы эшләй. Ул предприятиеларҙың береһе генә туҡтаһа, башҡалары ла етештереү циклын туҡтатырға мәжбүр.**

Үткән аҙнала Пикалево халҡы урамға, дөрөҫөрәге, юлға сыҡты. Юҡ, юҡ, улар ғәҙеллек юллап Мәскәүгә йәки Санкт-Петербургҡа киткәндәр микән тип уйлаһағыҙ, яңылышаһығыҙ. Элекке ваҡытта ғына ул батшаға йәки Ленинға ходоктар йөрөй торған булған. Хәҙер замана башҡа. Хәҙер "батша"лар халыҡҡа үҙҙәре килә. Бының өсөн бер нисә сәғәткә федераль трассаны биклэп тоторға, икенсе төрләрәк итеп әйткәндә, юлға сығырға кәрәк.

Пикалево халҡының михнәттәре 2008 йылдың авгусында башлана. Заводтар бер-бер артлы ябыла, йәки үҙгәртеп ҡороуға туҡтала. Тәбиғи, эшселәргә заводҡа юл ябыла. Бер үк өлкәлә эшләгән өс завод эшен туҡтатҡас, халыҡ торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре өсөн түләй алмаған, торлаҡ йорттарға йылы, артабан эҫе һыу биреү ҙә туҡтатыла. Күҙ алдыңыҙға килтерегеҙ әле - ир-егеттәргә, ғаилә хужаларына эш юҡ. Тотош ҡала - эшһеҙҙәр. Улар ни эшләй? Дөрөҫ, эсә, ғауға ҡуптара, тауыш сығара. Ярай, үҙ аллы ғына ҡаңғырһалар, ә берләшеп забастовкалар, митингылар ойоштора башлаһалар? "Эш хаҡын ваҡытында түләгеҙ!" тигән лозунгынан "Заводтар - эшселәргә!" тигән оран яңғырай башлаһа? Ә бит ундай ҡалалар Рәсәйҙә берәү-икәү генә түгел. Һәр бер өлкәлә, крайҙа, республикала, бер генә предприятиеға ҡарап торған ҡалалар тиҫтәләгән. Ил буйынса, тимәк, меңәрләгән.

Хәйер, һуңғы көндәрҙәге ваҡиғаларға әйләнеп ҡайтайыҡ.

2 июнь көнө Пикалево халҡы федераль трассаны бикләй. Улар ошо юлдан Санкт-Петербургҡа Премьер-министр Владимир Путин барырға тейеш тип фекер йөрөтә, шикелле. Юлда 400 саҡырымлыҡ "тығын" барлыҡҡа килә. Әммә Пикалево халҡы етәксе менән осраша алмай. Был ваҡиға тураһындағы мәғлүмәт бөтә федераль ваҡытлы матбуғат сараларының беренсе биттәрендә донъя күрә. Пикалевола Владимир Владимирович Путинды 3 июнь көнө лә көтәләр. Ә ул Финляндияға китә. Унда илдең премьер-министры менән осраша. Мөһим мәсьәләләрҙе хәл итә. Һәм ниһайәт, 4 июнь көнө генә Путин Пикалево ҡалаһына килә.

Премьер-министр ни эшләргә тейеш ине? Асылда Пикалево предприятиелары дәүләттеке түгел. Илдең иң бай кешеләренең береһе булған Олег Дерипасканыҡы һәм "Фосагро" хужаһы Максим Волковтыҡы. Ошо ике кеше уртаҡ фекер таба алмағанлыҡтан килеп сыҡҡан бәхәс Пикалево халҡын баш күтәрергә мәжбүр итте һәм Путинды был ҡалаға килтерҙе лә инде. Иҡтисади көрсөк осоронда хөкүмәт башлығы ҡала халҡын үҙ ҡанаты аҫтына алып, Пикалевола яңы производстволар булдырып, ә улар аяҡҡа баҫып эшләп алып киткәнгә тиклем эшһеҙҙәргә пособиелар түләүҙе ойошторорға, башҡа төрлө социаль саралар күрергә тейеш ине. Ни әйтһәң дә, капитализм ҡорорға матаһабыҙ. Иң мөһиме, шәхси милек һәм уның хужаһының мәнфәғәттәре тигән принципты алға һөрәбеҙ. Әммә Пикалево шарттарында Владимир Владимирович үҙен административ-команда системаһының тоғро вәкиле итеп күрһәтте. Журналистарһыҙ ғына ул олигархтар менән ниндәйерәк тонда һөйләшкәне билдәһеҙ. Ә бына ваҡытлы матбуғат саралары вәкилдәре алдында иһә бөтәһенә лә - Ленинград өлкәһе губернаторы Валерий Сердюковҡа ла, Олег Дерипаскаға ла ҡаты ғына эләкте. Бизнес социаль яуаплылыҡҡа эйә булырға тейеш, тип белдерҙе ул. Йәғни, ябайыраҡ итеп әйткәндә, ҡаланан, ошондағы предприятиенан табыш алаһың икән, бүлешергә, уртаҡлашырға онотма, заводыңды үҙгәртеп ҡороп алдынан ундағы эшселәрҙе ҡайҙа итерендә уйла. Дөрөҫ фекерҙәрме? Һис шикһеҙ. Кисәге үҙәк гәзиттәрҙе ҡарап сыҡҡас, Владимир Путинға аяғүрә баҫып алҡышланым. Тик шуныһы: капиталист (ә, аңлауығыҙса, Дерипаска - капиталист) иң тәүҙә мөмкин тиклем әҙерәк сығым менән мөмкин тиклем күберәк табыш алырға ынтылған кеше. Һәм уны бары тик аныҡ, ҡәтғи һәм ҡаты закондар, ошо закондарҙың теүәл һәм ваҡытында үтәлеүе, тағы ла закондарҙың бөтә кешеләр өсөн бер төрлө һәм бер йоғонтоло булыуы менән генә ауыҙлыҡлап торорға мөмкин. Был иһә дәүләттең туранан-тура эше.

Пикалево халҡы өсөн эш бик уңай тамамланды. Уларҙың бер нисә ай буйына түләнмәгән эш хаҡы Владимир Путин ҡалаға килгәндә үк банк карточкаларына күсерелгән булып сыҡты. Путиндың ҡырыҫ ҡарашы аҫтында Олег Дерипаска менән Максим Волков эште артабан да бергәләшеп дауам итергә килеште һәм договорға ҡул ҡуйҙы. Конфликт тамам. Ғәҙеллек тантана итәме? Айһай, йәмәғәт! Айырым бер ҡалала, бәлки, шулайҙыр. Ә ил күләмендә? Хәҙер Премьер-министрыбыҙ аҙнаһына бер тапҡыр бәләкәй ҡалалар буйлап йөрөп, ундағы мөлкәт хужаларын елкәләренән алып, эшселәргә эш хаҡын түләргә мәжбүр итер микән?

Ә бит Пикалево профсоюздар һәм айырыуса эшселәр өсөн бөгөнгө шарттарҙа үҙ хоҡуҡтарыңды нисек яҡларға кәрәклеген сағылдырған сағыу миҫал. Заводты яптылармы? Эш хаҡын түләмәйҙәрме? Урамға сыҡ. Юлға сыҡ. Путин килер ҙә барлыҡ мәсьәләләрҙе хәл итер. Аңлашыла - Путин башҡаса ил буйлап йөрөмәйәсәк. Әммә кешеләр бит уны белмәй. Һәм белергә лә теләмәй. Халыҡҡа бит бөгөн йәшәргә кәрәк. Яҡты киләсәкте көтөп арыны ул.

Быға тиклем ваҡытлы матбуғат саралары, көрсөк артабан да көсәйә ҡаласаҡ, халыҡ урамдарға сығасаҡ, тип күпме генә "һайрамаһын", кешеләр сыҙамлы һәм түҙемле булып сыҡты. Әммә 2 июнь ваҡиғалары Байкальск, Түбәнге Тагил, Златоуст, башҡа бик күп ҡалалар һәм ҡаласыҡтар халҡы өсөн этәргес көс, детонатор булып тормаясаҡ, тип кем бөгөн ышаныслы рәүештә әйтә ала?

Берәү ҙә. Хатта Путин да.

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*



# ВАНЯНАН - ИВАН ГРОЗНЫЙ...

Илебеҙ тарихының ниндәй генә битен асып ҡарама, һәр ҡайһыһында тиерлек ҡанға буялған юлдарға тап булабыҙ. Әле яңыраҡ "Рәсәй" каналы буйынса барған "Иван Грозный" фильмын ҡарағандан һуң күңелдә ауыр уй-кисерештәр тороп ҡалды. Шул тиклем үк хәшәрәтлек, яуызлыҡ, башкиҫәрлек сәскә атҡанмы икән рус батшалығының иң юғары баҫҡысында? Әллә фильмды төшөрөүселәр Иван IV батшаның тик кире яҡтарын ғына һүрәтләүҙе маҡсат итеп ҡуйғанмы? Әгәр ҙә тик ошо ғына факт төп маҡсат итеп ҡуйыла һәм миллионлаған тамашасыларҙың күңеленә ҡурҡыу тойғоһо инеп урынлаша икән, фильм нимәгә кәрәк булды һуң? Минеңсә, фильмда Рәсәйҙең тарихы ниндәйҙер кимәлдә боҙоп та күрһәтелгәнгә оҡшаған. Тарихсылар үҙ фекерен әйтер, тип ышанам.

Мин үҙем, мәҫәлән, фильмды ҡарағандан һуң күптән эҙләгән бер һорауыма яуап таптым кеүек. XX быуатта Сталиндың шәхес культы буш урында барлыҡҡа килмәгән икән, уның нигеҙҙәрен Иван Грозный һалған. Кенәздәрҙең, баярҙарҙың ҡанһыҙлығын, бер-береһенең ҡанын эсергә, башын киҫеп алырға әҙер тороуын сабый сағынан күреп үҫә Иван. Үҙе нескә күңелле, лирик тәбиғәтле булһа ла, кенәздәрҙең, баярҙарҙың үҙ-ара шундай мөнәсәбәте йоғонтоһонда нескә күңелле Ванянан Иван Грозный хасил була. Тимәк, Иван Грозный шул ваҡыттағы рус кенәздәре, баярҙары мөнәсәбәте, рус менталитеты емеше. Тимәк, уның урынында башҡа кеше булһа ла, "Грозный" барыбер формалашыр ине. Сталинға килгәндә лә, шулайҙыр, уның урынында башҡа кеше,Троцкиймы, Бухаринмы, кем генә булһа ла, "Сталин" барыбер формалашыр ине.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, 12, 13 һәм 14 июнь ял көндәре булып тора.

✔Быйыл абитуриенттар Рәсәй вуздарына ҡабул итеү имтихандары тапшырыу документтарын почта аша ебәреү мөмкинлегенә эйә. Документтарҙы ҡабул итеү 25 июлдә тамамланыуын иҫәпкә алып, уларҙы 10 июлгә саҡлы ебәреп өлгөрөргә кәрәк.

✔Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә дүрт авторҙың - Анатолий Ғиниәтуллиндың, Тимофей Тиминдың, Ҡотдос Латиповтың һәм Михаил Беловтарҙың китабы баҫылып сыҡты һәм улар Мәскәүҙә Башҡортостандың РФ Президенты эргәһендәге Тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә презентацияланды.

✔Уҡыусыларҙың туҡланыуын камиллаштырыу буйынса "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проекты сиктәрендә үткәрелгән экспериментал проекттар конкурсында баш ҡалабыҙ енеүсе тип танылды. Ул федераль бюджеттан илле миллион һумлыҡ субсидия алыуға өлгәште. Өфөнөң егерме дүрт мәктәбе ашханаһы ошо грант иҫәбенә ремонт эшләйәсәк һәм кухня ҡоралдары һатып аласаҡ.

✔Башҡорт дәүләт университеты "Вся Уфа" баш ҡала телевизион каналында тура эфирҙа уҡыу йортона ҡабул итеү ойоштора. 29 июндә 19 сәғәт 30 минутта мәктәп тамамлаусылар телевизор алдында ултырып ҡына "Вся Уфа" телеканалы аша БДУ-ның теләгән факультетына бюджет нигеҙендә уҡырға инеү хоҡуғы өсөн көрәшә ала. Был хоҡуҡҡа йәҙ һорауҙан иң күп яуап бирә алған кеше эйә буласаҡ. Ә 2-сенән алып 10-сыға тиклем урын яулаусылар сараны ойоштороусыларҙан ҡиммәтле бүләктәр аласаҡ. Тулыраҡ мәғлүмәтте www.all-ufa.ru. сайтында ала алаһығыҙ.

✔БР Президенты Мортаза Рәхимов Рәсәй Федерацияһы агросәнәғәт комплексы хеҙмәткәрҙәре профсоюзы рәйесе Н. Агапова менән эшлекле осрашыу үткәрҙе. Республикаға ул ошо көндәрҙә үткәрелгән агросәнәғәт комплексы хеҙмәткәрҙәре профсоюзының Волга буйы федераль округындағы территориаль комитеттары рәйестәре кәңәшмәһендә ҡатнашыу өсөн килгәйне.

✓ *һабантуй тәүҙә балалар милли уйындарҙы, йолаларҙы ишетеп кенә түгел, ә күреп белһен өсөн үткәрелә башлаһа, хәҙер гимназия уҡыусылары үҙҙәре һабантуйҙы ойоштороусы сифатында ла сығыш яһай.*



ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МӘКТӘП ҺАБАНТУЙЫМЫ?

## Ул да нимә тураһындалыр һөйләй

**Инорс биҫтәһендә урынлашҡан 140-сы Башҡорт гимназияһы сираттағы уҡыу йылын уңышлы тамамлағас, нисек ял итә, беләһегеҙме? Улар бар Калинин районы халҡын үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡырып, ысын һабантуй ойоштора.**

Йыл да милли йолаларҙы һаҡлау, төрлө милләттәр араһында мәҙәни бәйләнеш булдырыу, рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау, йәш быуындың ижади һәләттәрен үҫтереү, милли спорт төрҙәрен таратыу маҡсатында үткәрелгән һабантуй байрамын олоһо ла, кесеһе лә һағынып көтөп ала. Быйыл шәжәрә байрамына йомғаҡ яһау сараны тағы ла күркәмерәк, дәрәжәлерәк итте.

Гимназия директоры Илдус Ғилман улы Ситдиҡов әйтеүенсә, һабантуй тәүҙә балалар милли уйындарҙы, йола-саралар үткәреүҙең кәрәклеген тағы ла бер тапҡыр иҫбатланы.

Үҙәктән йыраҡ урынлашһа ла, 140-сы Башҡорт гимназияһы баш ҡаланың башҡа милли мәктәптәренән бер ҙә ҡалышмай. Уҡыусылар йылдан-йыл төрлө фән буйынса үткәрелгән олимпиадалар, конкурстарҙа ҡатнашып, юғары баһаға лайыҡ була, гимназияның ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәбе иҫәпләнеүе лә уларға өрҙәны мөмкинлектәр аса. Быйылғы уҡыу йылында гимназия яңы йыһаздар, ҡеүәтле компьютерҙар һәм башҡа техни-







ка һатып алған, ҡайһы бер кабинеттар ҡорамалдар менән тулыландырылған, локаль селтәргә тоташтырылған. Электрон дәреслектәр, мультимедия кластары дәресте тағы ла ҡыҙыҡлы һәм маҡсатлы итеп үткәрергә мөмкинлек бирә. Төрлө түңәрәктәр һәм спорт секцияларында ла балалар теләп шөғөлләнә.

ларҙы ишетеп кенә түгел, ә күреп белһен өсөн үткәрелә башлаһа, хәҙер гимназия уҡыусылары үҙҙәре һабантуйҙы ойоштороусы сифатында ла сығыш яһай, ә был уларҙы халыҡ тарихына һәм мәҙәниәтенә тағы ла яҡынайта төшә. Етмәһә, был сара хәҙер тотош район күләмендә үткәрелә башлаған. Ысынлап та, гимназия һабантуй үткәрмәһә, ҡасан күрер ине Инорс балалары ҡалаҡҡа йомортҡа һалып йүгереү, тоҡ кейеп йүгереү, күҙ бәйләп көршәк ватыу, "әтәс һуғышы", "ат ярышы" кеүек таһыллыҡты һәм һығылмалылыҡты үҫтереүсе милли уйындарҙы, ҡайҙа үҙе сыбыҡты ат итеп, ярышып ҡарар ине? Көрәшергә теләк белдереүсе малайҙарҙың да күп булыуы, уларҙың аталарының кәңәш биреп, дәртләндереп тороуы ла был милли спорт төрөнөң киләсәктә лә юғалмаясағына өмөт уятты, уҡыу йорттарында һабантуй кеүек

**Шулай итеп...**

**Һабантуй ҙа, Шәжәрә байрамы ла Ер, Тыуған ил, быуындар бәйләнешенә барып тоташа. Үҙенең тамырҙарын яҡшы белгән, ил-ер, тарихи-мәҙәни мираҫын өйрәнгән, йолаларын ихтирам иткән рухлы уҡыусыларҙың киләсәге лә яҡты буласағына шик юҡ. Әгәр ҙә балағыҙ шундай булып үҫһен, тиһәгеҙ, Инорс биҫтәһенең милли үҙәгенә әүерелгән, яңы технологиялар ҡулланып эшләгән заманса уҡыу йортона - 140-сы Башҡорт гимназияһына рәхим итегеҙ!**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# ШАХМАТСЫЛАРЫБЫҘ - БЕРЕНСЕ!

**Күптән түгел Сочи ҡалаһында Рәсәйҙең парламент һәм хөкүмәттәре, өлкә һәм ҡала хакимиәттәре араһында - шахмат буйынса VIII халыҡ-ара турнир, шулай уҡ БДБ илдәре хөкүмәттәре, Рәсәй ҡала хакимиәттәре араһында футбол буйынса VIII халыҡ-ара турнир булып үтте.**

Өфө ҡала округы хакимиәтенең шахматсылар командаһы был турнирҙа бишенсе тапҡыр ҡатнаша. 2005 йылда улар - дүртенсе, 2006 йылда өсөнсө урын алһа, 2007 йылда көмөш миҙалға лайыҡ була. Былтыр тағы ла өсөнсө урын яулайҙар. Ә быйыл иһә тәүге тапҡыр былдай көсөргәнешле уйында лайыҡлы сығыш яһап, еңеүсе исемен алып ҡайталар.

- Тәүге йылдарҙа командалар күберәк булһа, был юлы барлығы биш команда ҡатнашты. Күрәһең, иҡтисади көрсөк сәбәпсе булғандыр, - тип һөйләп китте Өфө командаһын етәкләүсе Өфө ҡала округы хакимиәтенең эштәр идараһыһы Азамат Дәүләткилдин (был аҙнанан Азамат Хәким улы яңы вазифала - Башҡортостан Республикаһы Президенты ярҙамсыһы булып эш башланы). - Шулар араһынан Рәсәйҙең Бойондороҡһоҙ Профсоюздар Федерацияһы ныҡ көслөләрҙән ине. Былдай ярыштар ныҡ көсөргәнешле үтә, хатта трагизмға барып етә. Ике йыл элек беҙ беренсе урын алабыҙ тигән ерҙән төшөп ҡалғайныҡ, быйыл бирешмәнек, үҙ маҡсатыбыҙға өлгәштек. Беренсе әйләнештә башта алдынғылыҡта барһаҡ та, уйын аҙағында саха-яҡуттарҙан еңелеп, өсөнсө урынға төшөп ҡалдыҡ. Был ҡаты еңелеүҙән һуң, егеттәрҙе йыйып алып, өгөт-нәсихәт уҡып, кәңәш-төңәш итеп алғас, улар үҙҙәрен ҡулға алды, икенсе әйләнештә сәмләнеп, дәррәү ярышҡа тотондо. Һәм, һөҙөмтәлә, 27 мәрәй йыйып, барыһын да уҙып киттек. Был ышаныслы һәм ныҡлы еңеү булды. Ғөмүмән, еңеү һәм еңелеү осраҡлы булмай. Беҙҙең тәүге әйләнештә 4,5 мәрәйгә еңелеүебеҙ ҙә, егеттәрҙең эйфорияға бирелеп, артыҡ маһайып китеүҙән булды. Шуға ла уйын тамамланмайынса тороп, алдан тынысланырға, үҙеңде ҡулдан ысҡындырырға ярамай, һәр ваҡыт уяу һәм һаҡ булырға кәрәк. Һуңғы сиккә тиклем көрәшергә кәрәк...

Айырым уйынсылар араһында шәхси беренселектә лә Өфө егеттәре һынатмай, сағыу сығыш яһай. Спорт мастерлығына кандидат Сергей Житников беренсе урынға сыҡһа, ФИДЕ мастеры Александр Ноздрин икенсе-өсөнсө урынды бүлешә. Спорт мастеры Владимир Шемагонов - дүртенсе, спорт мастерлығына кандидат Олег Карнаухов етенсе-һигеҙенсе урындар яулай. Шәхси ярышта егерме ике ҡатнашыусы араһынан беҙҙең егеттәрҙең призлы урындар алып ҡайтыуы Өфө командаһының көсө хаҡында һөйләй һәм уларҙың еңеүен иҫбатлаусы тағы ла бер дәлил булып тора.

**Әйткәндәй...**

**Байрам көндәрендә Өфөлә ошондай спорт саралары уҙғарыла:**

**11 июнь 10.00 сәғәттә** Дуҫлыҡ монументы буйындағы Ағиҙел ярында пляж волейболы буйынса асыҡ беренселек;

**12 июндә 10.00 сәғәттә** Конгресс-холл бинаһының аҫҡы яҡ майҙанында Рәсәй көнөнә, Салауат Юлаевтың тыуыуына 255 йыл тулыуға һәм Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуға 435 йыл тулыуға арналған спорт байрамы;

**12-14 июнь көндәре 11.00 сәғәттә** Дуҫлыҡ монументы буйындағы Ағиҙел ярында пляж волейболы буйынса турнир;

**12 июндә 12.00 сәғәттә** Баланово ҡасабаһының урман паркы зонаһында мотоуҙышы буйынса Башҡортостан Республикаһы беренселегенең этабы үтә.

**12 июндә 11 сәғәттә** Ленин исемендәге майҙанда урам баскетболы буйынса Өфө ҡалаһы беренселегә уҙа. Был ярышта егет һәм ҡыҙҙар араһында 13-15 йәш, 16-17 йәш, 18 һәм унан өлкән йәштәге категорияларҙа 1500 спортсы ҡатнаша. Иң яҡшы командалар быйыл 5-6 сентябрҙә Мәскәүҙә үтәсәк урам баскетболы буйынса Рәсәй кубогына финалда Өфө исеменән сығыш яһаясаҡ.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә мәғариф идараһығы начальнигы Азамат Сәйфуллин баш ҡалала Берҙәм дәүләт имтихандары тапшырыуҙы ойоштороу мәсьәләһе буйынса мәғлүмәт бирҙе. Өфөлә мәктәпте тамамлаусы 4358 уҡыусы өсөн БДИ тапшырыу буйынса 27 пункт ойошторолған. БДИ үткәреүгә 3 мең уҡытыусы йәлеп ителгән. Быйыл бөтөн вуздар ҙа абитуриенттарҙы бары тик БДИ һөҙөмтәләре буйынса ҡабул итәсәк.

✓Оператив кәңәшмәлә Өфө эске эштәр идараһығы начальнигы урынбаҫары М. Задин да мәғлүмәт бирҙе. Билдәләнелеүенсә, быйыл дүрт айҙа баш ҡалала 8940 енәйәт теркәлгән, был былтырғы ошо осорға ҡарағанда күберәк. Отчет осоронда бигерәк тә үлтереүҙәр, уҫал ниәт менән һаулыҡҡа зыян килтереү, талау кеүек енәйәттәр артҡан.

✓БР Финанс министрлығының Территориаль финанс идараһығы начальнигы Илгиз Насыртдинов журналисар менән матбуғат конференцияһында баш ҡала бюджетының беренсе кварталдағы үтәлеше тураһында һөйләне. Билдәләнелеүенсә, ҡала округының беренсе кварталда йыйылған үҙ килеме планға ҡарата 95,6 процент тәшкил иткән.

✓Совет районында 192-се "Карлуғас" балалар баҡсаһы ремонттан һуң яңынан асылды. Баш ҡалала һуңғы биш йылда ғына 5 балалар баҡсаһы төҙәлдә, 12-һе ремонттан һуң сафҡа индерелдә.

✓Баш ҡалала һыу инеү сезоны асылды һәм ул август аҙағына тиклем дауам итәсәк. Әле һыу йылынып етмәгән, ә шулай ҙа көндәр йылыныуға табан бара. Октябрь районы халҡы - Ҡашҡаҙан күлендә, "Сипайловский" пляжында, Бикбай урамының 39-сы йорто эргәһендәге ял зонаһында, Ленин районынығылар - "Сафроновский" һәм "Затон" пляждарында, калининдар - "Теплое" күлендә, "Песчаный" пляжында, Дим районы халҡы "Глубокое" күлендә һыу инә ала.

*АФАРИН!*

# ТЕЛӘҺӘК...

## айыҡ көйө лә байрам итеп була



**Өфө ҡалаһында уҡып, эшләп йөрөүсе йәштәребеҙҙе берләштерер, аралаштырыр, таныштырыр өсөн баш ҡалабыҙҙа әленән-әле төрлө саралар уҙғарылып тора. Күптән түгел Өфө ҡалаһында Башҡорт йәштәре иттифағы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, "Юлдаш" радиоһы, Киров районы хакимиәтенең йәштәр бүлеге тарафынан башҡорт йәштәре һабантуйы булып үтте. Йыл да баш ҡалала райондар йәштәре һабантуйҙарҙы һәр береһе үҙе айырым уҙғара торғайны, быйыл был сараның бергә үтеүе лә йәштәр тарафынан ыңғай күренеш тип баһаланды.**

Башҡорт йәштәрен берләштереү генә түгел ине маҡсат, ә башҡорт йәштәрен матур һәм әхлаҡлы итеп, ата-бабалар йолаларына ярашлы байрам итергә өйрәтеү ҙә ине. Башҡорт йәштәре иттифағы рәйесе урынбаҫары Фәнзил Әхмәтшин был хаҡта шулай тигәйне: "Байрамды шешәнән башҡа күҙ алдына килтермәгән өлкәндәргә әйәреп, һабантуй һәм башҡа күмәк сараларҙа йәштәрҙең дә эсеп, әҙәпһеҙ ҡыланып йөрөгәнен күҙәтергә тура килгеләй бит. Әле ҡарап торам да, йәштәребеҙ әйләп шул кире сифаттарҙан арынып бара, шикелле. Иң мөһиме, йәштәрҙе эскелек һаҙлығынан тартып алыу. Айыҡ аҡыл менән йәшәүсе кешенең тормошо мәғәнәле, маҡсаттары изге, күңеле таҙа була. Киләсәктә ошоға өлгәшә алырбыҙ, тип уйлайым". Ысынлап та, был һабантуй киләсәккә ниндәйҙер өмөт уятҡандай булды. Башҡорт йәштәре иттифағы ағзаларының һәр ерҙә тәртип күҙәтеп, барыһын да ойоштороп, хатта сарага килгән машиналарҙы, халыҡты майҙанға тикшереп үткәреүе генә сәбәпсе булмағандыр йәштәребеҙҙең үҙ-үҙен тотошонда, улар аңлы рәүештә ҡушылғандыр "Әйҙәгеҙ, айыҡ сарала ҡатнашайыҡ!" тигән саҡырыуға. Унан һуң, йәштәребеҙ хәҙер күпләп дин юлына баҫа, иманлы егеттәр, ҡыҙҙар күбәйә. Бындай сараларҙа ҡатнашҡаны булмаған, әле яңы ғына райондан күсеп килеп, Өфөлә йәшәй башлаған бер егеттең ошо йәһәттән аптырағаны - үҙе фәһем. "Һабантуйҙа майҙан тултырып йөрөгән яулыҡлы ҡыҙҙарҙан күҙемде ала алманым да ҡуйҙым, - тигәйне ул. - Шул тиклем мөғжизәле, илаһи икән мосолман кейемендәге ҡыҙҙар. Икенсе мөғжизә - йәш егеттәрҙең майҙандан ситкәрәк китеп, күмәкләп намаҙ уҡыуы булды. Ошондай тәртипле, иманлы йәштәр янында кемдең батырсылығы етеп, һыра шешәһенә үрелһен, ти..."

Һабантуйға килгән йәштәр уйнап-көлөп кенә ҡалманы, төрлө ярыш-бәйгеләрҙә көс һынашты. Футбол, волейбол, пейнтбол кеүек уйындарҙа ярыштылар, район батырҙары үҙ-ара милли көрәштә көс һынашты. Район йәштәре берлектәре араһында йола күрһәтеү, милли аш-һыу, биҙәлеш буйынса ярыштар уҙғарылды. Был ярыштарҙан беҙ уларҙың йолаларыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе матур итеп һынландыра белеүҙәрен күрҙек. Аш-һыу буйынса бөрйәндәр, биҙәлеш буйынса - хәйбуллалар, йола күрһәтеүҙә Баймаҡ йәштәре беренсе урынды лайыҡлы яуланы.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**



*ӘЙТӘГҮР!*

**Баш ҡалабыҙҙа башҡорт мәктәптәре күбәйеүе ҡыуанысльы күренеш. Ауылдарҙан ғына килмәйҙәр Өфө ҡалаһындағы гимназия, лицейҙарға, ә баш ҡаланың үҙендә йәшәгән башҡорт ғаиләләре лә балаларын ошо уҡыу йорттарына бирергә тырыша. 90-сы йылдар башындағы кеүек, уларҙы "Балаларығыҙҙы башҡортса уҡытығыҙ", тип өгөтләргә лә кәрәкмәй. Хәйер, был турала бер нисә ата-әсәнең үҙҙәренән әйттерәйек әле.**

# МӘКТӘП ҺАЙЛАҒАНДА...

## яңылыша күрмә

**Ләлә һәм Айсыуаҡ БАЙТИМЕРОВТАР:** Үҙебеҙ ауылда тыуып үҫтек, икебеҙ ҙә юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң, Өфөлә эшкә ҡалдыҡ. Ғаиләбеҙҙә ике ул үҫә. Әлбиттә, һәр ата-әсәнең балаһын үҙ телендә һөйләшергә өйрәтеүе мотлаҡ. Беҙ ҙә малайҙарыбыҙ менән өс йәшкә тиклем тик тыуған телдә генә аралаштыҡ. Шунан һуң ғына башҡа телдәргә өйрәтә башланыҡ. Башҡорт мәктәбе өйҙән алыҫ урынлашҡанға күрә, башланғыс синыфҡа өлкән улыбыҙҙы үҙебеҙҙең яндағы ҡала мәктәбенә биргәйнек. Үҙебеҙгә иртә менән эшкә китергә кәрәк, баланы мәктәпкә алып барыуы ҡыйын булыр, мәшәҡәтләнмәйек, тип уйланыҡ. Тик ярты йыл үтеүгә, малайыбыҙҙың тәртибе үҙгәрә башлағанын шәйләнек. Тиҙ ҡыҙып китә, тупаҫ һөйләшә... Тәүҙә быға игтибар итмәй, сәбәбен төшөнөргә тырыштыҡ. Шунан бер танышыбыҙ: "Һеҙ балағыҙҙы үҙе теләмәгән, ят мөхиткә уҡырға биргәнһегеҙ", - тип әйтте. Бәлки, дөрөҫтөр, тип, икенсе йыл кесе улыбыҙ менән бергә башҡорт мәктәбенә бирҙек. Ысынлап та, был мәктәп мөхите яҡшыраҡ, уҡыусылар бер-береһен көмһетмәй, уҡытыусылар бер баланы ла ситкә типмәй. Ике улыбыҙ ҙа тыуған телдә иркен аралаша, уҡытыусыларын хөрмәт итә, көн дә мәктәпкә ашығып баралар. Ата-әсә өсөн ошо үҙе ҡыуаныс инде.

**Заҡуан БИКТАШЕВ, өлкән инспектор:** Ғаиләбеҙҙә бер ҡыҙ һәм ул үҫтерәбеҙ. Бер ниндәй икеләнеүһеҙ икеһен дә баш ҡалабыҙҙағы 136-сы башҡорт лицейына уҡырға бирҙек. Яҡшы уҡыныулар, икеһе лә өлгөлө уҡыусыларҙан булды. Ҡыҙым мәктәпте тамамлап, эшләп йөрөй инде. Ә улым Юлай быйыл тамамлаясаҡ, имтихандарын бирә.

Ни өсөн башҡорт мәктәбенә уҡырға бирҙек? Үҙ милләтебеҙгә ғүмер буйы тоғро ҡалырға тейешбеҙ, тип олатай-өләсәйҙәребеҙ балыбыҙға һеңдереп үҫтерҙе. Был йоланы беҙ артабан дауам итергә хоҡуҡлы. Тормош иптәшем менән икебеҙ ҙә көнө буйы эштә булғанға күрә, балаларыбыҙҙы тәрбиәләүшергә мәктәп ярҙам итте, тиһәк, хаталанмаҫбыҙ. Ошонда белем алдылар, ошонда хеҙмәткә өйрәнделәр. Шуның да әйтеп үтергә кәрәк, башҡорт мәктәптәрендә әхләк, тәрбиә көслө. Был мәктәптә уҡыусылар араһында тәртип боҙоп йөрөүселәр юҡ. Шулай уҡ уҡыусылар асылдарына тоғро ҡалып, тыуған халҡының әҙәбиәтен, тарихын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеп үҫә.

**Зәлиә АҪЫЛБАЕВА, шәфҡәт туташы:** Белем биреү яғынан да, тәртип яғынан да беҙҙең мәктәптәр башҡа мәктәптәрҙән айырылып тора. Ниндәй генә башҡорт мәктәбенә, лицей-гимназияға барып инмә, унан нур бөркөлөп тора, яҡты, иркен, балаларҙың йөҙөндә тик йылмайыу ғына. Балалары башҡорт мәктәбендә уҡыған ата-әсәнең дә күңеле тыныс. Был мәктәптәрҙә уҡыусы балалар һәр ерҙә өлгөр. Улар араһында буласаҡ спортсылар ҙа, артистар ҙа, ғалимдар ҙа үҫә. Уларҙың төрлө фәндәр буйынса олимпиадаларҙа, конкурстарҙа еңеүе шуны иҫбатлай.

**Шулай итеп... Ҙур ҡалала милли асылыңа тоғро ҡалыу еңелдән түгел. Бигерәк тә үҫеп килеүсе йәш быуын, йәштәр ҡала йоғонтоһона тиҙ бирелеүсән. Был проблеманан ҡотолоу өсөн башҡорт мәктәптәре ҙур эш башҡара. Уҡытыусылар иңенә белем биреү генә түгел, балаларҙа милли рух уятыу яуаплылығы ла һалынған. Шуға күрә ата-әсәләр балаларын һис икеләнмәйенсә башҡорт мәктәптәренә уҡырға бирһен, тип теләргә генә ҡала.**

**Зәкирә АБДУЛЛИНА яҙып алды.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й   Ҡ А М У С

# Себер һәм Алыҫ Көнсығыш шарлауыҡтары



Рәсәйҙең иң бейек, матур шарлауыҡтары Көнсығыш Саянда урынлашҡан. Гутар шарлауығы бик бейек булмаһа ла (50 метр), уның ҡеүәте һәм матурлығы барыһын да хайран итә.

Путорана тауҙарында ла шарлауыҡтар бик күп. Тальниковая йылғаһындағы дөйөм бейеклеге 600 метрға еткән шарлауыҡ беҙҙең илдә иң бейеге һанала.

Билдәле тикшеренеүсе, яҙыусы һәм сәйәхәтсе В.К. Арсеньев Приморьелағы Һул Амгу йылғаһындағы шарлауыҡ тураһында яҙа. Йылға 300 метр бейеклектәге вертикаль ҡаяларға бай каньон буйлап тыныс ҡына аға ла, ҡапыл 33 метрлыҡ ҡаянан ап-аҡ һыу бағанаһына әүерелеп, аҫҡа ҡолай.

Итуруп утрауында Иван Грозный вулканының төньяҡ-көнсығыш һыртынан океанға ҙур булмаған йылғасыҡ ағып төшә. Уның һыуҙары ямғыр яуғандан һуң тулыланып китә. Ул ағып төшкән бейеклек - 141 метр, шарлауыҡты Илья Муромец тип йөрөтәләр.

Был шарлауыҡты билдәле яҙыусы, географ һәм сәйәхәтсе Ю.К.Ефремов шулай итеп һүрәтләй: "Тирәягыбыҙҙа томан, хатта ап-аҡ томан һыу өҫтөн ҡаплаған. Йылғаның һәр моронон үткән һайын, яһынан-яңы болоттар йөҙөп сыға торҙо. Сираттағы болошто үткәс, алдыбыҙға һоро төҫтәге болот килеп сыҡты. Нимә был? Аҡ томан араһында һоро болот ҡайҙан килеп сыҡҡан? Бәлки, вулкандың берәй ярығынан ҡайнар газ күтәреләләр? Алға бер нисә тиҫтә саҡрым үткәс, сер асыла. Аҡ шарлауыҡ һыуҙары тамсыларынан барлыҡҡа килгән икән ул. Баш әйләнерлек бейеклектән көслө һыу ағымы ағып төшә. Уның ағымын ел әләктереп ала ла, йә һулға, йә уңға тартҡылап уйнай башлай. Был ғорур йылға менән ел генә идара итә ала".

***✓ Өфө йылғаһы тапҡырында ғына ҡаланан биш саҡрымлап булған бейек һәм бик матур урында әлеге ваҡытта ла ҡаласыҡ ҡалдыҡтары күренә, унда, һөйләүҙәренсә, нуғай хандары йәшәгән.***

*ХӘҠИҠӘТ ШУНДАЙ*




**"Ырымбур тарихы" яҙмаларының 24-се параграфына иҫкәрмәһендә шулай тиелә: "Өфө ҡалаһы батша һәм бөйөк кенәз Иоанн Васильевич батшалыҡ иткәндә, Ҡаҙан Рәсәй скипетрына тамам буйһонғандан һуң күп тә үтмәй, башҡорт халҡының һорауы буйынса төҙөлә"; ә ошо "Топография"ның беренсе өлөшөнөң 4-се бүлегендә иһә ошо халыҡ хаҡында ла табыуы мөмкин булған билдәле һәм дөрөҫ мәғлүмәттәр хәбәр ителә. Бында шуларҙы аңлатыу һәм тулыландырыу ҙа етә.**

**Аныҡ мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, башҡорттар 7081 йылда (йәғни Христос Раштыуаһынан алып 1573 йылда) үҙҙәренә һалынған яһаҡты үҙ йорт-ҡаралтылары сиктәрендә түләүе еңелерәк булһын өсөн генә түгел, ә дошмандарҙан йәшенеү һәм һаҡланыу урыны кәрәк булған өсөн дә ошо ҡаланы төҙөтөүҙе һораған. Ул Ағиҙел йылғаһы буйында уның ағышы буйынса уң яғында, бөтә яҡлап та бейек тауҙар уратып алған урында төҙөлгән, шул уҡ ваҡытта уның бөтә тереклек итеү урыны ҙур һәм тәрән һигеҙ йырын араһында ята; шуларҙың ҡаланы арҡырыға йырып үткән береһенән Сутолока тигән йылға ағып сыға.**

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАҺЫ ТОПОГРАФИЯҺЫ

## Өфө ҡалаһы һәм тотош Өфө провинцияһы тураһында

Ҡаланың атамаһына килгәндә, уны яңы бирелгән исем тип түгел, ә элеккеһе кире ҡайтарылған, тип фекер йөрөтөргә була һәм шуныһы раç: борондан ошо урындарҙа йәшәгән нуғай хандары үҙ ҡалаһына исемде үҙе биргән; Өфө йылғаһына ҡарағанда ике тапҡырға ҙурыраҡ булған Ағиҙел йылғаһы өçтөндә тип әйтерлек төҙөлгән ҡаланың, бер ниндәй ҡала төҙөлөшө булмаған яҡтан, Ағиҙелдең ағышы буйынса уң яғына ҡаланан өс саҡрымлап самаһы үрҙәрәк ҡойған Өфө йылғаһының атамаһын йөрөтөүендә бер мәғәнә лә юҡ. Шул уҡ ваҡытта Өфө йылғаһы тапҡырында ғына ҡаланан биш саҡрымлап булған бейек һәм бик матур урында әлеге ваҡытта ла ҡаласыҡ ҡалдыҡтары күренә, унда, һөйләүҙәренсә, нуғай хандары йәшәгән. Шулай булыуы ла ихтимал: Өфө йылғаһы буйындағы был ҡала әлеге Өфө ҡалаһынан алдараҡ уҡ Өфө тип аталғандыр; шуға эйәреп, урыçтар төҙөгән ҡалаға ла Өфө атамаһы бирелгәндер. Башҡорттар Өфө йылғаһын Өфө-Иҙел, йәғни, Өфө-йылға, ә Ағиҙелде - Аҡ-Иҙел, йәғни аҡ йылға тип йөрөтә.

Нуғай даруғаһы Ҡаратабын улысының атаҡлы башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев был йәһәттән аңлатма биреп, шулай тине: әле Ҡаҙан батшалығының һәм башҡорттарҙың Рәсәй скипетрына буйһоноуынан күпкә элегерәк нәҡ ошо урында Ағиҙел йылғаһы буйлап үргәрәк Өфө йылғаһы тамағына тиклем һәм Өфө йылғаһы янындағы тауҙарға тиклем мөһабәт ҡала йәйрәп ятҡан; уның төйәкләнеү урыны ун саҡрымлап араға һуҙылған. Был ҡаланың һуңғы хужаһы булып Тирә-Бабату-Клюсов исемле нуғай ханы торған; унда ул ҡыш ваҡыттарында ғына йәшәгән, ә йәй Дим йылғаһы буйында, Өфө ҡалаһынан 50 саҡрымлап алыçлыҡтағы ике урында: Әзирәт тигән ҙур күл һәм Ислаҡ йылғаһы янында йәшәгән; унда йорт-ҡаралты байтаҡ ҡына булған; шул күл янында әле булһа мәсет, һәм шулай уҡ Ислаҡ йылғаһы буйында ла таш мәсет һәм йорт күренеп тора, тик улар инде емерелеп бөткән. Тирәхандың ҡулы аçтында нуғайҙар һәм меңле башҡорттарының 12 улысы булып, улар ханға һыçар тиреһе һәм бал менән яһаҡ түләгән. Ул саҡта Туратау тип йөрөтөлгән (хәҙер Ҡаҙантау тиҙәр) Өфөнөң бер ерендә ҙур бер йылан килеп сыҡҡан һәм ул, ҡалаға килеп, күп халыҡты ағыуы менән зарарлаған һәм үлтергән, имеш. Шунлыҡтанмылыр, үҙенең нуғайҙары менән Дим йылғаһы буйына китеп, унда бер аҙ йәшәгән, шул саҡ ул урыçтарҙың Ҡасим ҡалаһын яулап алыуы һәм Ҡаҙанға ла яçҡыныуҙары хаҡында белеп ҡала һәм, уларҙан ҡурҡып, Кубанға китә; шул ваҡыт әлеге ағыулы йылан да Өфө йылғаһы буйындағы тауҙа йәшенә һәм юҡ була, шунан һуң уның бер зыяны ла теймәй.

Юғарыла әйтеп кителгән һәм ҡаланы уратып алған бейек тауҙарҙа, Ағиҙел йылғаһына табанырaҡ, бик күп алебастр һәм эзбиз таштары ята; шулай уҡ Ағиҙел йылғаһы буйы ҡаяларында ике яҡлап мәмерйәләр бар; элгәре унда, урындағы халыҡ һөйләүенсә, дәрүиштәр йәшәгән, ләкин хәҙер мәмерйәләрҙең байтаҡ өлөшө ишелеп төшкән.

Өфө ҡалаһы төҙөлөшө өсөн нилектән был тигеҙ булмаған һәм тауҙар менән уратып алынған урын һайланыуы беленеп тора: Өфө һәм Ағиҙел йылғаһы ағымдары был тауҙарҙы уратып ала һәм ярымутрау рәүешендә ҙур морон яһай, бында һөрөнтө ерҙәр байтаҡ ҡына, һәм тәүге осорҙа ҡаланың бөтә ҡапҡалары тип әйтерлек ошонда булғандыр, сөнки башҡорттарҙың, ҡалмыҡ һәм ҡырғыҙ-ҡайсаҡ яуҙарынан урындағы халыҡтың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында Өфө йылғаһынан Ағиҙелгә тиклем ун саҡрымлап арала тәрән соҡор ҡаҙылған һәм өçтән ул ҡоймаланып алынған, уның урта өлөшөндә инеп-сығып йөрөү өсөн башня һәм унда ҡарауыл торған; һәм унан бөтә тарафтарға юлдар айырылып киткән һәм был засека тип аталған нығытма Өфө ҡалаһына ғына түгел, ә иçкә алынған йылғалар уратып алған (30 саҡрым йә унан да күберәк) биләмә өсөн дә ныҡлы һаҡ була; ләкин әлеге ваҡытта ул ҡоймалар ҙа, юл разъездары ла юҡ, соҡорҙо үçемлек баçҡан, ләкин башня, инде бик ныҡ туҙһа ла, әлеге аралыҡтың уртаһынан һаман да күренеп тора.

Бөгөнгө ҡаланың нығытмаһы буралған ағас стенанан, ә ҡайһы бер урындарҙа ҡоймалы ҡоролманан тора, унда инеү һәм сығыу өсөн алты ҡапҡа, шуларҙың береһе - Ҡаҙандан килеп инә торғаны - Ҡаҙан, ян-яҡтағылары: уң яҡтан беренсеһе -Ильин, икенсеһе - Фролов, һул яҡтан - Себер, Спасск һәм Успенский ҡапҡаһы тип атала; Ағиҙел йылғаһы янына ҡоймалы бейек ағас манаралы замок йәки кремль, уның эсендә верховный апостолдар Петр менән Павел һәм Николай Чудотворецтарҙың урынерҙәре менән Смоленск Изге әсә исеменә таштан собор сиркәүе һалынған. Ошонда уҡ провинция кәнсәләре, гауптвахта, цейхгауз, воевода йорто һәм төрмә; ләкин элгәре, 1759 йылда йәшендән сыҡҡан янғын ваҡытында былар барыһы ла янып юҡҡа сыҡҡан; собор сиркәүенә лә ярайһы ғына зыян килгән. Эстәге һәм ҡаланан тыштағы торлаҡтар йәмғеһе 651 хужалыҡты тәшкил итә; урын-ере менән бергә алты приход сиркәүе һәм ике монастырь: беренсеһе Успенский, унда - монахтар менән архимандрит; был монастырь аръяғында Өфөгә яҡын ике ауылда, йәғни Дыуанай һәм Чесноковкала, Михаил Федорович батша тарафынан бирелгән 271 йән крәçтиән. Икенсеһе, ҡыҙҙар монастыре, Рождественский тип исемләнгән; унда игуменья һәм 40 монахиня, шуларҙан игуменья һәм 27 монахиня оклад аҡсаһы ала, ә ҡалғандары эш хаҡы алмай, төшкән хәйер-саҙаҡа иçәбенә йәшәй.

Сауҙагәрҙәр һәм һөнәрселәр ревизия буйынса 230 йән; Ырымбурға күсергәндән һуң бында хеҙмәт иткән регуляр пехотанан 1 рота, драгундар 2 рота, яртыһы Ырымбурға йәшәргә күсерелгәндән һуң йәнә 150 кеше казактар ҡалды.

Ҡала яңы Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан күсерелгән кешеләр менән тулыландырылды, улар боронғо ғәҙәт буйынса атлы һәм йәйәүле уҡсылар хеҙмәтен үтә, аҙаҡ йәйәүлеләрҙән һалдат полктары ойошторолдо; атлылар тәүҙә уҡсылар тип, аҙаҡ хеҙмәт итеүсе казактар тип йөрөтөлгән. Аҙаҡ ошонда уҡ ҙур ҡалаларҙан поляк шляхтаһына ҡараған бер нисә дворян күсерелә, уларҙан 2 драгун ротаһы һәм өсөнсөһө - сит илдеке - ойошторола, уларға башҡорт ерҙәренән ян-яҡтағы һәр тарафҡа утыҙар саҡрым тәшкил иткән дачалар бирелә; улар янындағы ауылдарҙа һуңғы ревизия буйынса урындағы помещиктарҙың 636 йән иçәпләнгән крәçтиәне йәшәй; ошо дворяндар һәм уларҙың хеҙмәткә яраҡлы балаларынан, Ырымбур экспедицияһынан ике регуляр полк - Ырымбур һәм Өфө полктары ойошторола; әле улар Уй линияһы нығытмаларында урынлашҡан һәм Өфө, Бөрө, Минзәлә иçәбенә тулыландырыла. Өфөнән Ырымбурға - 333, Ҡазанға - 520, Мәскәүгә тиклем 1255 саҡрым ара.

Өфө провинция кәнсәләре буйһоноуындағы боронғо ҡала яңы йәшәү урындары: Бөрө, Оса, Минзәлә һәм Ырымбур экспедицияһы буйынса яңы төҙөлгән нығытмалар: Нуғайбәк, Табын, Йәлдәк һәм Красноуфимск.

**Петр РЫЧКОВ.**
**("Ырымбур губернаһы топографияһы" китабынан).**



Иҫке күпер

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ, ИМӘНҠАЛА!*

# ӨФӨ ҠӘЛҒӘҺЕНӘ - 435 ЙӘШ,

## ә Өфө ҡалаһына нисә йәш?

**Байрамдың атамаһы хәҡиҡәткә яҡынлаштырылды: быйыл тәүге тапҡыр "Өфө ҡәлғәһенә - 435 йыл"тип байрам итәбеҙ баш ҡала көнөн. Күп һанлы сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Өфөнөң тарихы 1574 йыл менән генә сикләнмәй. Өфө XVI быуаттың 50-се йылдарында уҡ (1554 йыл), йәғни урыҫтар килеп, ҡәлғә төҙөгәнгә тиклем үк, башҡорт ҡалаһы булараҡ билдәле булған. Гәзит уҡыусылар был турала "Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәләләрҙән әҙме-күпме таныш. Өфөнө өйрәнеүсе ғалимдарҙың, тарихсыларҙың гәзитебеҙҙә баҫылған ҡайһы бер сығыштарынан өҙөк килтерәбеҙ. Ҡабатлағандан, доға иҫкермәй, тиҙәрме әле...**

● **География фәндәре докторы Айбулат Псәнчин:** Башҡортостан, Өфө боронғо карталарҙа нисек барлыҡҡа килгән, тиһәк, тәү сиратта, Италия сауҙәгәрҙәре ағалы-ҡустылы Пицaverage... 

Ул картала урта быуатта Италияның, Европа илдәренең Алтын Урҙа менән сауҙа иткән ваҡыты сағылдырылған. Шуға күрә унда Алтын Урҙаның 40-тан ашыу ҡалаһы, Иҙел, Кама буйҙары һүрәтләнгән. Шул иҫәптән бөгөнгө Башҡортостанда Пашхарти ҡалаһы күрһәтелгән. Унан ары тағы бер Пашхарти тигән яҙыу бар. Уныһы башҡорттар йәшәгән ер тигәнде аңлата. Пашхарти ҡалаһы иһә, гидрография яғынан ҡарағанда, Кама, Иҙел буйы тирәһендә урынлашыуы менән бөгөнгө Өфө еренә тура килә. "Өфө" яҙыуы Рәсәй карталарында XVII-XVIII быуаттарҙа барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, Петр Годуновтың 1667 йылғы Себер һыҙмаһында "башкирцы", "Уфа" тип күрһәтелә. Ә Европа сығанаҡтарында Пашхарти (башҡорт) тип яҙыу традицияһы хатта XVIII быуатта ла дауам итә. Йәғни улар, рус картографтарынан айырмалы рәүештә, Өфө тип түгел, ә Пашхарти тип яҙалар.

Был бер булһа, икенсе яҡтан, урта быуаттарҙа был яҡтарҙа йөрөгән Плано Карпини, Вильям Рубрук кеүек сауҙәгәрҙәр, сәйәхәтселәрҙең Башҡортостандың ҡайһы еренән үтеп киткәнен белмәйбеҙ. Улар Өфө яғында йөрөгәнме, әллә Каспийға яҡыныраҡ, көньяҡтаныраҡ үткәнме? Әгәр Өфө яғынан үтмәһәләр, башҡорттар йәшәгән илде күреп белгәнгә күрә, Европа картографтары карталарҙа төп ҡаланы ла Пашхарти, йәғни башҡорт ҡалаһы тип билдәләүҙәре ихтимал.

● **Археолог-ғалим, профессор, академик Нияз Мәжитов:** Өфө-II ҡаласығы беҙҙең эраның I быуатында барлыҡҡа килгән. Һәм XIV-XV быуаттарға тиклем йәшәгән. Был раҫлауҙы ҡаласыҡтағы ҡеүәтле культура ҡатламы менән дәлилләп була. XVIII быуатта бөйөк рус ғалимы Петр Рычков Дим буйы башҡорттары старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев һөйләгәндәргә нигеҙләнеп, хәҙерге Өфө ҡалаһы территорияһында X-XVI быуаттар араһында Имәнҡала тигән башҡорт ҡалаһы урынлашыуы, унда Торахан тигән батшаның хакимлыҡ итеүе, уның бында ҡышҡы айҙарҙа ғына йәшәп, яҙлы-көҙлө Дим, Сәрмәсән буйҙарында йәйләүҙә үткәреүе тураһында яҙып ҡалдыра. Ҡыҙрас Муллаҡаев "Башҡорт тарихы" тигән ҙур китап булыуын һәм уның 1735-1740 йылдарҙа юҡҡа сығыуын да иҫкә алып китә. Ошо тарихи яҙма документтарҙа сағылған мәғлүмәттәр һәм башҡа кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр Өфө-II ҡаласығының VI-XII быуаттарҙа уҡ тарихи Башҡортостандың ҡеүәтле сәйәси һәм мәҙәни үҙәге булыуын, бында хандарҙың ставкаһы тороуын иҫбат итә.

● **Тарихсы һәм тележурналист Салауат Хәмиҙуллин:** Урыҫ йылъяҙмасылары мәғлүмәттәренә таянып, тарихсы Николай Карамзин шулай тип яҙа: "1505 йылда Мөхәммәтәмин хан вельможаларының береһен, Өфө кенәзен, ниндәйҙер күрһәтмә менән Мәскәүгә ебәрә." (Н. Карамзин. "Рәсәй дәүләте тарихы", IV быуат). 1505 йылда воевода Иван Нагой килгәнгә ҡәҙәре, бында Өфө кенәзе йәшәгән икән, тимәк, бында Өфө лә булған. Мәсьәлә шунда ғына: ул ниндәй рәүештә булған? XIX быуатта Өфө вице-губернаторы Волков тарафынан йыйылған башҡорт риүәйәттәре һәм хәтирәләренә ярашлы, ҡаланың ул саҡтағы хакимы Торахан атлы була. Ул Себер хакимы Күсем хандың Өфөгә хакимлыҡ итергә килгән туғаны була. Урҙа Өфөһөнөң хан йәшәгән "Шайтан ҡаласағы" тип йөрөтөлгән нығытмаһы Торатау тип атала. Археологтар раҫлауынса, был ҡаласыҡта беҙҙең эраның III быуатында уҡ кешеләр йәшәй, ә XVI быуатта ул Өфө хакимының ставкаһына әйләнә. Ҡала үҙе хан һарайынан аҫтараҡ урынлашҡан була.

* XII быуатта уҡ әле Иҙриси исемле бер сәйәхәтсе Урал тауҙарында тимер иретеүҙәре менән шөғөлләнеүҙәре тураһында яҙып ҡалдыра. Ә ул төҙөгән донъя картаһында "ард Бакурт мил аль-атрак" иле, йәғни "Төркиҙәр ҡәбиләһенән булған башҡорт ерҙәре" билдәләнгән. Уларҙа Ҡасра, Масра һәм Ҡараҡуя ҡалалары тамғалана.

* XIII һәм XIV быуаттарҙа Венгрияның тиҫтәләгән католик миссионерҙары венгрҙарҙың тыуған илен эҙләп, Көньяҡ Уралға ағыла. Уларҙың береһе Башҡортостан хакимы һарайында ла була. Бына ул ни тип яҙып ҡалдыра: "Мин, Иоганка, ике венгр туғаным һәм бер инглиз менән Баскардияға, ҙур халыҡҡа килеп еттек... Бөтөн Баскардияның хакимы һәм барлыҡ халҡы мосолманлыҡ менән ағыуланған... Беҙҙе эләктерҙеләр һәм шундай аяуһыҙлыҡ менән төрмәгә ябып ҡуйҙылар..." (Иоганка Венгрҙың ҡустыһының хатынан, 1320 йыл).



*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

**Юлдан китеп барыусы бер йәйәүле сүлмәк күреп ҡала һәм уны таяғына эләктереп, ситкә ырғыта (Мосолман кешеһе юлсыға ҡамасауларҙай, зарар килтерерҙәй әйберҙе юлдан ситкә сығарып ташларға бурыслы). Сүлмәк эсендә йылан булған икән. Йылан сүлмәктән сығып йәйәүлегә ташлана.**

# САҘАҠАНЫ ҮҘЕҢДӘН БАШЛА,

## йәғни ул үҙеңдән артып ҡалғанда ғына башҡаға бирелә

Йылан күҙ алдында ҙурая башлай. Сүлмәктә сағында 2-3 ҡарыштан артыҡ оҙон булмаған был йылан 5-6 ҡолас оҙонлоғона етә һәм юлсыны быуа башлай. Юлсының тын алырлыҡ та хәле ҡалмай. Ярҙам итерҙәй берәй йән эйәһе юҡмы икән тип, тирә-яғына күҙ һала. Ҡапыл йәйәүле ғәскәрҙең биш һалдаты күренә. Бәләгә тарыған йәйәүле баштан-аяҡ ҡоралланған һалдаттарға ҡысҡыра. Әммә һалдаттар уға иғтибар итмәйенсә үтеп китә.

Йылан табышын быуыуҙы дауам итә. Бәләгә тарыған кеше ҡотолоуҙан өмөтөн өҙмәй. Берәйһе килеп сыҡмаҫмы, тип тағы юлға ҡайырылып ҡарай. Унда утыҙ һалдаттан торған һыбайлы ғәскәр күренә. Бөтә көсөн йыйып, бәләгә тарыған юлсы һыбайлылырға ҡысҡыра, ярҙам итеүҙәрен үтенә. Һыбайлылар бәләгә тарыған кешене күрмәйенсә үтеп китә.

Бер аҙҙан юлда зәғиф, сибек, йолҡош ҡына бер кеше күренә. Һылтыҡлай-һылтыҡлай килә ул. "Йәйәүле ғәскәр ҙә, атлы ғәскәр ҙә ҡотҡарманы. Был меҫкен генә кешенең ярҙамы тейерме икән?" - тип икеләнә хәле мөшкөл юлсы. Шулай ҙа бүтән сараһы ҡалмағас, уға өндәшә, ярҙам итеүен үтенә.

Сибек юлсы ниндәйҙер доға уҡып, сүлмәкте юл ситенә ҡуя. Йылан яңынан бәләкәй хәленә ҡайта һәм сүлмәккә инеп юғала.

Бәләнән ҡотолған кешегә ҡотҡарыусыһы ошоларҙы һөйләй:

- Йәйәүле ғәскәрҙең биш һалдаты - биш ваҡыт намаҙың. Һин биш ваҡыт намаҙыңды уҡымағанһың. Шуға күрә теге биш һалдат һине күрмәгән дә, ишетмәгән дә, - тип аңлатҡан әүлиә. - Ә инде утыҙ һыбайлы - утыҙ көнлөк ураҙаң. Һин ураҙа тотмағанһың. Шуға улар һиңә ярҙам итмәгән. Ҡасандыр бер фәҡиргә ярты икмәкте саҙаҡа итеп биргән була юлсы. Сибек, аҡһаҡ кеше - ана шул саҙаҡа икән. Ихлас күңелдән бирелгән саҙаҡа әҙәм балаһын бәләгә тарығанда хәленән килгәнсе ҡотҡарырға тырыша.

**Әйткәндәй, Исламда саҙаҡаның күләме билдәләнмәгән. Сөнки саҙаҡаны һәр кем ихлас күңелдән, хәле еткән күләмдә бирә.**

**"Саҙаҡаны үҙеңдән башла", - тигән бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис сәләм. Саҙаҡа кемгәлер бирелгән тиндәр йәки һумдар ғына түгел. Саҙаҡа изгелек итеү, яҡшылыҡ эшләү, һүҙ менән дә, мал менән дә ярҙам итеүҙе аңлата. Шуға күрә кеше иң беренсе нәүбәттә үҙен хәстәрләргә бурыслы. Үҙен хәстәрләй, үҙенең хәлен еңеләйтә, үҙенә изгелек эшләй алмаған кеше бүтәндәргә нимә менән ярҙам итә алһын инде?**

**Саҙаҡа үҙеңдән артып ҡалғанда ғына бирелә. Үҙеңдең тамағың ас икән, ҡулыңдағы һуңғы телем икмәкте бүтәндәргә биреү аҡлы эш рәтенә инмәй. Кеше иң элек үҙен тәьмин итергә бурыслы. Шунан һуң иң элек үҙеңдең яҡын кешеләреңде ҡарарға тейешһең. Үҙең дә, яҡындарың да мохтаж түгел икән, артабан күршеләреңде, дуҫ-иштәреңде хәстәрләйһең. Уларҙың мохтажлығы юҡ икән, шул сағында инде сит кешеләргә - мохтаждарға, меҫкендәргә, фәҡирҙәргә ярҙам итәһең.**

**Был мәсьәлә исламда ҡәтғи тәртипкә һалынған һәм кешелек йәшәйешенең иң юғары ҡаҙанышын билдәләй.**

***✓ Тарихсылар XIII быуатта Башҡорт илендә булып мәғлүмәт туплаған Юлиан яҙмалары тураһында һәйбәт белә. Ул Башҡорт хакимының эргәһендә монголдарҙың илсеһе булыуы тураһында ла мәғлүмәт ҡалдырған.***

# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ йәки Халыҡтар дуҫлығын

**Ата-әсәне һайлап алмаған кеүек, тыуған ерҙе лә һайлап булмай. Беҙ, тиҫтәләрсә милләт вәкилдәре, боронғо Башҡортостан ерендә йәшәйбеҙ. Бында күпме яу-һуғыштар уҙған, ҡыйралыш-түңкәрелештәр, революция һәм кризистар кеше сыҙамлылығын һынаған - быны тик тарих үҙе генә беләлер. Ниҙәр генә булмаһын, ошо боронғо ерҙән йәшәү ҡото китмәгән. Беҙ әле лә, донъяла, күрше илдәрҙә, шулай уҡ Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә булып торған тәбиғәт һәм йәмғиәт бәлә-ҡазалары тураһында ишетеп: "Ярай ошондай һил һәм тыныс тормош хөкөм һөргән ерҙә тыуғанбыҙ, Аллаһҡа шөкөрана ҡылып ҡына йәшәрлек был изге ерҙә", - тибеҙ. Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы Советы рәйесе, академик Нияз МӘЖИТОВ һәм уның урынбаҫары, Башҡортостан рустары Соборы Башҡарма комитеты рәйесе Владимир САМОРОДОВ менән ҡорған әңгәмәбеҙ республика халыҡтарының һыйышып һәм килешеп йәшәүенә арналды.**

**Беҙҙәге йәмғиәт тотороҡлоғо, халыҡтарҙың татыу һәм килешеп йәшәй алыуы Илаһ ҡөҙрәтенәнме, еребеҙҙең изгелегенәнме, әллә тарихи традиция һөҙөмтәһеме - бына ошо хаҡта ниҙәр әйтер инегеҙ?**

▸ **Владимир САМОРОДОВ:** Иң тәүҙә беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың бергәләшеп, һыйышып йәшәү тәжрибәһе булыуын иҫкә алырға кәрәк. Уларҙын донъяға ҡараштарында башҡа халыҡтарға яҡшы мөнәсәбәттә булыу ныҡлап урынлашҡан. Был мөнәсәбәттәрҙең тап шул юҫыҡта үҫешеүенә ошо ерҙә элек-электән йәшәгән башҡорттарҙың киң күңелле, алсаҡ һәм ҡунаҡсыл булыуы ла йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Борондан уҡ йәнәшә йәшәгән сыуаш, татар, мари, удмурт, мордва күскенселәре булһынмы, һуңынанираҡ ошо ерҙәрҙе төйәк иткән урыҫ, украин йәки белорустармы - уларҙың һәр ҡайһыһына башҡорт ерендә урын табылған, ситтән килгән бер кем дә ҡыйырһытылыуға дусар ителмәгән.

Тарихи яҡтан ҡарағанда, бынан 450 йыл элек башҡорттарҙың рус дәүләтенә ҡушылыуы баһалап бөткөһөҙ аҙым булған. Һәр ике яҡ килешеүгә килеп, үҙ өҫтөнә билдәле йөкләмәләр алған. Ошо замандарҙан алып Рәсәй дәүләтендә халыҡтарҙың яңы менталитеты - евразиясылыҡ сифаттары нык үҫешә башлай, ә был айырым этностарҙың да, дәүләттең дә берҙәмлеге өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра. Әлбиттә, ошо ваҡыт арауығында төрлө ҡатмарлы осорҙар була, көрәш-ихтилалдар ҙа ҡубып тора. Әммә быны һис тә милләт-ара конфликт сифатында ҡарап булмай, сөнки уларҙың төп маҡсаты власть әһелдәренең килешеүҙәрҙе боҙоуына, халыҡтарҙы йәберһетеүенә, уларҙың хоҡуҡтарын боҙоуына ҡаршы йүнәлтелгән була.

Рәсәйҙең төбәктәрҙә алып барған сәйәсәтен мин колониаль сәйәсәт тип әйтмәҫ инем. Әлбиттә, дәүләтте, уның иҡтисадын, ҡаҙнаһын нығытыу өсөн провинцияларҙа тәбиғи байлыҡтарҙы үҙләштереү, сәнәғәт объекттарын күпләп төҙөү башлана. Әммә был эшкә йыш ҡына урындағы халыҡ та йәлеп ителә, улар араһынан уҡымышлы белгестәр үҫеп сыға. Губерналар башында батша хөкүмәте тәғәйенләгән кешеләр ҡуйылһа ла, урындарҙағы идараға этник элита вәкилдәре йәлеп ителгән, хәрби хеҙмәттә командир вазифаларына ҡуйырлыҡ милли кадрҙар әҙерләнә башлаған. Быларҙың барыһын да бәләкәй милләттәр өсөн ыңғай күренеш тип баһаларға кәрәк.

Тормошобоҙҙоң тотороҡлоғо тураһында һүҙ башлап, республикабыҙ етәкселеге алып барған системалы милли сәйәсәттең һөҙөмтәлелеген билдәләп үтмәйенсә булмай. Һәр халыҡтың телен, милли мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн күп нәмәләр эшләнә бөгөн. Мәғариф, мәҙәниәт, сәнғәт, хужалыҡ итеү, дәүләт һәм муниципаль идара итеү өлкәләрендә һәр халыҡтың талантлы һәм эшлекле шәхестәре үҫһен өсөн уңайлы шарттар булдырылған беҙҙә. Күп милли байрамдарыбыҙ халыҡтарыбыҙҙың уртаҡ байрамына әүерелеп бара. Шул уҡ һабантуйҙа (бәлки, уның спорт менән уртаҡлығы күп булғангалыр) хәҙер бар милләт вәкилдәре лә бик теләп ҡатнаша. Бына ошондай халыҡтар берҙәмлегенә шаһит булғас, бында илаһи көстәрҙең дә ҡатнашлығы барҙыр ул, тип уйлап ҡуяһың. Һәр хәлдә, беҙҙәге интернациональ берҙәмлекте дин әһелдәре лә бик хуп күрә.



***Иң тәүҙә беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың бергәләшеп, һыйышып йәшәү тәжрибәһе булыуын иҫкә алырға кәрәк. Уларҙын донъяға ҡараштарында башҡа халыҡтарға яҡшы мөнәсәбәттә булыу ныҡлап урынлашҡан. Был мөнәсәбәттәрҙең тап шул юҫыҡта үҫешеүенә ошо ерҙә элек-электән йәшәгән башҡорттарҙың киң күңелле, алсаҡ һәм ҡунаҡсыл булыуы ла йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Борондан уҡ йәнәшә йәшәгән сыуаш, татар, мари, удмурт, мордва күскенселәре булһынмы, һуңынанираҡ ошо ерҙәрҙе төйәк иткән урыҫ, украин йәки белорустармы - уларҙың һәр ҡайһыһына башҡорт ерендә урын табылған, ситтән килгән бер кем дә ҡыйырһытылыуға дусар ителмәгән.***

▸ **Нияз МӘЖИТОВ:** Владимир Николаевичтың әйткәндәренә ҡушылып, бына нимәгә иғтибарығыҙҙы йүнәлтер инем: беҙҙә милләт-ара конфликттар өсөн һис бер объектив сәбәп юҡ. Бындай ижтимағи ситуация Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһын булдырғанға тиклем үк нығынып өлгөргәйне, һәм был беҙҙең милләт-ара теләктәшлегебеҙҙе һәм хеҙмәттәшлегебеҙҙе үҫтереү өсөн һәйбәт нигеҙ булды. Халыҡтарыбыҙҙың татыу, килешеп-һыйышып йәшәүе тураһында уйланғанда, тарихи Башҡортостан еренең иҫ киткес бай төбәк булыуының әһәмиәтлелеген билдәләп үтергә кәрәк. Тәбиғәт-климат шарттары ла бында кешегә йәшәү өсөн уңайлы мөмкинлектәр тыуҙыра. Шуның өсөн был төбәктә бик боронғо замандарҙан бирле кеше йәшәгән, һәм беҙ үҙебеҙҙе бында яралған бөйөк тарихи мәҙәниәт мирасҫылары итеп ҡарай алабыҙ. Һәр кеше үҙ ғаиләһенә ереккән кеүек, үҙе табынған тәбиғи мөхит менән бер рәттән, үҙе аралашып йәшәгән этник даирәне лә яҡын итеп ҡабул итә. Ул тик ошонда ғына туған телен, халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, этник мәҙәниәтен үҙләштерә, үҙенең йәшәү рәүешен булдыра. Күп милләтле дәүләттә һәр бер халыҡҡа үҙ этник мөхитен булдырыу өсөн ыңғай шарттар тыуҙырыла икән, бында ниндәйҙер милләт-ара ығы-зығыға, аңлашылмаусанлыҡҡа юл ҡуйылмай. Был йәһәттән беҙ Рәсәйҙә лидерҙар рәтендә торабыҙ: тиҫтәләгән халыҡтарҙың телен, мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереүгә дәүләт өҫтөнлөгө бирелгән республика булараҡ, Башҡортостанды хәҙер Рәсәйҙән ситтә лә милләт-ара татыулыҡ өлгөһө итеп ҡабул итәләр.

Ҡоро һүҙ генә булмаһын өсөн, миҫал килтерәйем. 1995-2000 йылдарҙа миңә Рәсәйҙең байтаҡ төбәктәрендә йөрөп сығырға тура килде. Иң ауыр тәьҫир иткәне бына нимә булды: ҡайҙа барһаң да, ташландыҡ ауылдар, ярым емерек ҡаралты харабалары, эшкәртелмәгән ерҙәр... Ә беҙҙә бындай ауыр эҙемтәләрҙән ҡотолоу хаҡында күп ҡайғыртылды, реформаларҙың кире йоғонтоһон йомшартыу өсөн байтаҡ саралар ғәмәлгә ашырылды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, килеп тыуған ауырлыҡтарҙан тулыһынса ҡотолоп булманы, беҙҙең ауылдарыбыҙ ҙа ошо кире йоғонтоға дусар булды, шулай ҙа халыҡтарыбыҙҙың күпселеге төшөнкөлөккә бирелеүҙән йолоп ҡалынды.

Бына ошондай шарттарҙа милли аҙсылыҡтар мәнфәғәттәрен яҡлау, уларҙың мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереүгә булышлыҡ итеү маҡсатында Рәсәй халыҡтары ассамблеяһы, ә республикабыҙҙа Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы төҙөлдө. Хәҙерге заманда властар өҫтән ниндәй директива төшөрөр икән, тип көтөп ултырыу юҡ, йәмәғәт ойошмалары үҙҙәре байтаҡ башланғыстарҙы ғәмәлгә ашырып, милли-мәҙәни проблемаларҙы хәл итеү, милли төбәктәрҙә йәшәү шарттарын яҡшыртыу маҡсатында үҙаллы эш башҡара. Тәүге мәлдәрҙә беҙ ошо йәмәғәт ойошмаларының эшен аҙ-аҙлап башлап ебәреп, был эштең һөҙөмтәле була алыуына артыҡ өмөт итмәһәк тә, дәүләт органдары яғынан да ярҙам алып, билдәле бер башланғыстарҙың йәмғиәттә киң резонанс табыуын күрҙек. Хәҙер төрлө милли ойошмаларҙың күмәкләп башҡарған эштәре тап ана шул бер маҡсатҡа - республикабыҙҙа халыҡтарҙың бер ниндәй конфликтһыҙ, татыу һәм тыныс шарттарҙа йәшәй һәм эшләй алыуын тәьмин итеүгә йүнәлтелгән.

▸ **В. САМОРОДОВ:** Беҙҙә милләт-ара низағтарға ерлек юҡ, сөнки һәр халыҡтың милли-мәҙәни ихтыяждары төрлө дәүләт программаларында иҫәпкә алына, уларҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн аныҡ саралар ҡарала. Дәүләт органдары милли йәмәғәт ойошмаларының һорауҙарын ҙур иғтибар менән өйрәнә, законлар аша ла, башҡарма власть эшмәкәрлегендә лә һәр этностың проблемаларын ғәҙел рәүештә хәл итеүҙе талап итә. Республикабыҙҙа милләттәр тиң күрелә, әреһе-вағына бүлеп ҡарау юҡ. Шул уҡ ваҡытта уларҙың бер-береһенә йоғонтоһо бик көслө. Бына йыш ҡына башҡорт мәҙәниәтен тергеҙеү тураһында ишетергә тура килә, ә ул юҡҡа сыҡмаған бит: быуаттар буйына тупланған бөйөк мираҫты һаҡлау һәм үҫтереү тураһында һүҙ барырға тейеш. Башҡорт мәҙәниәтенең башҡа халыҡтарҙың ыңғай йоғонтоһо аҫтында яңы сифаттарға эйә булғанын инҡар итеп булмай. Бәлки, уның иҫ киткес бай һәм һоҡланғыс булыуы башҡорттарҙың Европа һәм Азия халыҡтары менән тығыҙ бәйләнештә йәшәүе һөҙөмтәһелер. Халыҡ-ара бәйләнештәр мәҙәни үҫеш өсөн яңы мөмкинлектәр аса. Беҙ уникаль мөхиттә йәшәйбеҙ: бында Евразия мәҙәни менталитетын булдырған халыҡтар берләшмәһе барлыҡҡа килгән. Дәүләт органдары ла ошо мәҙәни байлыҡты бөтә республика мәнфәғәттәрендә файҙаланыу мөмкинлеген булдыра. Беҙҙә проблемаларыбыҙҙы ла айырымланыу аша түгел, ә бергәләп хәл итеү формаларына өҫтөнлөк бирелә. Тап шуның өсөн милли ойошмаларыбыҙ бер бинала - Халыҡтар дуҫлығы йортонда урынлашҡан, кәңәшләшеп эш итеү өсөн Ассамблеябыҙ бар, Президент янындағы Йәмәғәт советы ла шул юҫыҡта эш алып барасаҡ.

**Икенсе яҡтан, милли йәмәғәтселектең республикабыҙҙа алып барылған сәйәсәтте йоғонтоло һәм һөҙөмтәле итеүгә лә булышлыҡ итеүе бәхәсһеҙ. Киреһенсә, сәйәсәтендә башлыса моноэтник йүнәлеш алған республикаларҙа (Украина, Грузия һ.б.) эске тотороҡһоҙлоҡ шул тиклем көслө, ул хатта "төҫлө" революцияларға алып килә. Был йәһәттән полиэтник структуралы дәүләттәр, ғәҙел милли сәйәсәт алып барылған хәлдә, бар яҡтан да тотороҡлораҡ булып сыға түгелме һуң?**

▸ **В. САМОРОДОВ:** Дәүләттең күп милләтле булыуы уның сәйәси, иҡтисади һәм ижтимағи климатына ҡамасаулыҡ итмәй. Конституциябыҙға, ҡабул ителгән законларыбыҙға ярашлы, беҙҙә барса халыҡтарҙың үҫеше өсөн ыңғай сәйәси мөхит булдырылған. Күпселекте тәшкил иткән рус халҡы өсөн ниндәйҙер айырым ташламалар йә өҫтөнлөктәр ҡаралмаған, шул уҡ ваҡытта рустарҙа бар милләт вәкилдәренә хөрмәт менән ҡарау тәжрибәһе бик ҙур әһәмиәткә эйә. Әгәр шулай булмаһа, Рәсәй иң тотороҡһоҙ дәүләттәрҙең береһе булыр ине.

Моноэтник дәүләттәргә хас булған бер ҙур етешһеҙлек бар: унда кландар барлыҡҡа килеп, шуларҙың береһе власҡа килһә, төрлө низағтарға, талаш-тартышҡа ерлек тиҙ тыуа. Элекке Урта Азия республикаларында кландар йоғонтоһо бик көслө, был сәйәси ситуацияға тәьҫир итмәй ҡалмай. Һуңынан, СССР тарҡалғандан һуң барлыҡҡа килгән суверенлы дәүләттәрҙе үҙ орбитаһында тоторға теләгән АҠШ йоғонтоһон да иҫәпкә алырға кәрәк. Ҡаҙағстан Президенты Назарбаевтың баш ҡалаһы Алма-Атанан Астанаға күсереүен ошондай сәбәптәр менән дә бәйләргә кәрәктер. Ваҡытында башҡорттарҙың да үҙ дәүләтселеге булып, улар үҙ хандарына буйһоноп йәшәгән. Әммә, билдәле булыуынса, башҡорт ханын айырым клан түгел, төрлө ырыу вәкилдәре йыйыны тәғәйенләгәне билдәле. Сәйәси тотороҡһоҙлоҡтоң иң беренсе сәбәбе - дәүләттә йәшәү кимәленең самаһыҙ түбәнәйеүе. Эшһеҙлек, ғаилә килеменең үтә түбән булыуы, балаларға тейешле белем бирә алмау һәм башҡа шундай ауырлыҡтар теләһә ниндәй дәүләтте лә эстән нык ҡаҡшата, ризаһыҙлыҡҡа, төрлө ҡаршылыҡтарға алып килә.

▸ **Н. МӘЖИТОВ:** Ҡырғыҙстанда, Украинала, Грузияла, башҡа урындарҙа тоҡанып киткән "төҫлө" революцияларҙы беҙ бик борсолоп ҡабул иттек, был хәлдәрҙе уларҙың Башҡортос-

✓ ***Яугирлыҡ, ҡаһарманлыҡ - башҡорттарҙың генетик сифаты кеүек ҡабул ителә. Улар үҙҙәрен һаҡлай, дошманға ҡаршы тора алмаһа, тарих аренаһынан төшөп ҡалыр ине.***



# Мәңгелек һәйкәле,

## тарих үҙе тыуҙырған

танда йәшәгән яҡташтары ла ауыр кисерҙе. Бынан биш йыл элек Ҡырғыҙстанда бер аҙна фәнни командировкала булып ҡайтҡайным, ундағы тормош хәлдәрен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Эйе, был илдәрҙең иҡтисади торошо беҙҙекенә ҡарағанда насарыраҡ, халыҡ ярлыраҡ йәшәй. Шул уҡ ваҡытта сит ил йоғонтоһоноң саманан тыш көслө булыуы ла иғтибарҙы йәлеп итә. Иң ҡеүәтле капиталистик дәүләттәр бында үҙ сәйәси маҡсаттарын ғәмәлгә ашырырға тырыша. Улар был илдәрҙә Рәсәйгә ҡарата ышанмаусанлыҡ уятып, ошо илдәр етәкселегенең Рәсәй Федерацияһы менән һәр төрлө мөнәсәбәттәрен ҡыҫҡарта барыуын көсәй. Әммә был мөхиттә күп быуаттар барышында барлыҡҡа килгән халыҡ-ара бәйләнештәрҙе туҡтатырға ынтылып, дуҫтарса мөнәсәбәттәргә кәртә ҡуйырға тырышыусылар үҙ маҡсаттарына өлгәшә алмаясаҡ. Урта Азия һәм Кавказ халыҡтары менән традицион дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тулыһынса тергеҙеләсәк, тип уйлайым.

▶ **В. САМОРОДОВ:** Бында сит йоғонтоноң ошо дәүләттәр өсөн үтә зыянлы булыуын барыһы ла таный башланы инде. Бигерәк тә демократик ҡоролош үҫешмәгән шарттарҙа был аяныслы һөҙөмтәләргә алып килә. Әммә бөгөн был йәһәттән Рәсәй менән элекке традицион мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу яҡлылар күбәйгәндән-күбәйә бара. Рәсәйҙең ошондай уҡ тигәндәй ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы үтеп сығa алыу тәжрибәһе лә бар. Был иң тәүҙә совет дәүерендә милләт-ара мөнәсәбәттәрҙә өлгәшелгәндәрҙе, дәүләтселек структураһын емермәйенсә һаҡлап алып ҡалыу менән бәйле.

**Шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер "кыҙыу баш" сәйәсмәндәр, Рәсәйҙең милли-территориаль бүленешен большевиктар хатаһы тип нарыҡлап, милли республикаларҙы бөтөрөү, илде ҡайтанан "губерналаштырыу" проекттарын алға һөрә. Бындай хәүефле сәйәсәт милләт-ара низағтарға ерлек биреп, Рәсәй берҙәмлегенә лә бер ни менән дә ҡаплап булмай торған зыян килтерә түгелме ни?**

▶ **Н. МӘЖИТОВ:** Рәсәй - бар яҡтан да бөйөк, ғәжәп ҙур ил. Бында йәшәгән халыҡтарҙың һәр береһенең үҙ теле, мәҙәниәте, ҡабатланмаҫ тарихы бар. Ошо халыҡтар үҙҙәренең меңәр йыл арауығында формалашҡан тәбиғи-иҗтимағи мөхитендә көн итергә теләй. Мәҫәлән, башҡорттар һәм Үҙәк власть араһында һәр ике яҡтың билдәле бер йөкләмәләрҙе үтәүе мотлаҡ шарт итеп ҡаралған, һәм ошо шарттар тейешле документтарҙа теркәп ҡалдырылған. Айырым аныҡ ер биләмәләренә аҫабалыҡ хоҡуғы, тел, дин, ғөрәф-ғәҙәттәр азатлығы, урындарҙағы идара итеү тәртибе кеүек мөһим шарттар тап башҡорттарҙың теләге һәм талабына ярашлы Мәскәү дәүләте тарафынан таныла. Әммә бындай Килешеү башҡорттар өсөн яңылыҡ, тип әйтеп булмай. Тарихсылар XIII быуатта Башҡорт илендә булып, улар хаҡында бер аҙ мәғлүмәт туплаған Юлиан яҙмалары тураһында һәйбәт белә. Бына шул Юлиан Башҡорт хакимының (ханының) эргәһендә монголдарҙың илсеһе булыуы тураһында ла мәғлүмәт ҡалдырған. Тимәк, монголдар һәм башҡорттар араһында дипломатик мөнәсәбәттәр булған, тигән һүҙ бит был! Тарихта башҡорттарҙың 1235-1236 йылдарҙа монголдар менән бәрелештәрҙә ҡатнашыуына ҡарамаҫтан (ул замандарҙа дала халыҡтарының бер-береһенә ҡаршы асыҡ яуҙа ҡатнашыуы ҡәҙимгә бер ваҡиға булыуын оноторға ярамай), улар араһында Килешеү нигеҙендә союздашлыҡ мөнәсәбәттәре урынлашҡан икәнлеге лә билдәле.

**Һеҙ монголдар тарафынан яулап алынып, Алтын Урҙа дәүләтенә ҡушылған урыҫ кенәзлектәре лә ул замандағы Башҡорт иленең Алтын Урҙалағы статусы тураһында хәбәрҙар булған, тип әйтергә теләйһегеҙме?**

▶ **Н. МӘЖИТОВ:** Сыңғыҙхан мираҫсылары - Алтын Урҙа хандары уның башҡорт ханына биргән ярлыҡ-грамотаһын иҫәпкә алып, Башҡорт иленең Алтын Урҙа составында автономиялы идара ителеүсе өлкә булып ҡалыуы менән килешеп йәшәгән. Алтын Урҙа тарихын бик һәйбәт өйрәнгән Мәскәү археологы Федор Давыдов та монгол-татарҙарҙың башҡорт ханын иҫән ҡалдырыуы тураһында яҙа, сөнки башҡорттар монголдар ҡуйған шарттар менән килешә. Монголдар, ысынлап та, үҙҙәренә ҡаршылыҡ күрһәткәндәрҙең юлбашсыларын язалап, үҙ ирке менән монголдарға ҡушылған ил баштарын ярлыҡаған. Әлбиттә, Алтын Урҙа дәүләтендә йәшәгән башҡа халыҡтар был турала һәйбәт белгән. Ғөмүмән, ҙур территориялы, күп халыҡлы дәүләттәр менән идара итеү урынларҙа бер ни тиклем үҙаллылыҡ, билдәле кимәлдә автономия хоҡуҡтары булыуын талап итә. Был йәһәттән башҡорттар беренсе булһа, ошоға оҡшаш шарттарҙа Мәскәү дәүләтенә башҡа халыҡтар ҙа ҡабул ителгән: украиндар, поляктар, Кавказ халыҡтары һ.б.

▶ **В. САМОРОДОВ:** Урта быуаттарҙа урындарҙағы этник элитаға таянмайынса, ҙур дәүләт менән идара итеп булмаҫ ине. Алтын Урҙа составындағы рус кенәзлектәре лә ошо дәүләт сиктәрендә алыш-биреш итеп йәшәй, хандар менән дә билдәле бер мөнәсәбәттәр урынлаштырыла. Ҡайһы бер рус кенәҙҙәре үҙ балаларын Урҙаға аманат итеп тә ебәрергә риза була, был билдәле кимәлдә ышаныс белдереүҙе лә аңлата бит. Әлбиттә, көсһөҙҙәр көслөгә буйһонмай, башҡаса сара юҡ. Әммә шул уҡ процестар Рус дәүләтенең берләшеүенә, көсәйеүенә булышлыҡ итә. Ә илгә яулап алыусы һөжүм иткәндә, берләшеү тенденциялары көсәйеп, берҙәм дәүләт нигеҙҙәрен булдыра.

**Халыҡтар тарихын үҙ мәнфәғәттәренә яраҡлаштырып, боҙоп күрһәтергә тырышыусылар ҙа күбәйеп китте һуңғы арала…**

▶ **В. САМОРОДОВ:** Тарихты яңынан яҙырға теләүселәр етерлек бөгөн. Мәҫәлән, Украинала, Прибалтика илдәрендә Совет осорон тик ҡара күҙлектән генә баһалап, тарихҡа ревизия яһау "мода"ға инеп китте. Иң аянысылыһы - ошо сәйәсмән ишараттары үҙ ҡараштарын аҡлар өсөн төп алым итеп "этник" карта ҡуллана, тотош халыҡҡа "оккупант" исеме тағыуҙан да тартынмай улар. Дәүләт кимәленә күтәрелгән ошондай сәйәсәт бер ниндәй яҡшы һөҙөмтәләргә килтермәйәсәк, был халыҡтар араһында ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы көсәйтеп, төрлө низағ-конфликттарға юл ғына асасаҡ.

***Беҙҙә милләт-ара конфликттар өсөн һис бер объектив сәбәп юҡ. Бындай иҗтимағи ситуация Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһын булдырғанға тиклем үк нығынып өлгөргәйне, һәм был беҙҙең милләт-ара теләктәшлегебеҙҙе һәм хеҙмәттәшлегебеҙҙе үҫтереү өсөн һәйбәт нигеҙ булды. Күп милләтле дәүләттә һәр бер халыҡҡа үҙ этник мөхитен булдырыу өсөн ыңғай шарттар тыуҙырыла икән, бында ниндәйҙер милләт-ара ығы-зығыға, аңлашылмаусанлыҡҡа юл ҡуйылмай. Был йәһәттән беҙ Рәсәйҙә лидерҙар рәтендә торабыҙ: тиҫтәләгән халыҡтарҙың телен, мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереүгә дәүләт өҫтөнлөгө бирелгән республика булараҡ, Башҡортостанды хәҙер Рәсәйҙән ситтә лә милләт-ара татыулыҡ өлгөһө итеп ҡабул итәләр.***

**Рус-башҡорт мөнәсәбәттәренең иң тәүге мәлдәрен иҫәпкә алғанда, Ҡаҙанды яулап алған Иван Грозныйҙың башҡорт иленә яу асмайынса ғына башҡорттарҙы Мәскәү ҡанаты аҫтына алыуы иғтибарға лайыҡ.**

▶ **Н. МӘЖИТОВ:** Батша воеводалары Ҡаҙан ханлығы ғәскәрҙәрен Себергә тиклем эҙәрләп барһа ла, башҡорт ерҙәрен урап үтә. Иван Грозный үҙе Ҡаҙанды алыу менән Мәскәүгә юллана. Күрәһең, уны башҡорт ерҙәренең күп өлөшө Нуғай ханы ҡулы аҫтында булыуы ла туҡтатҡандыр. Шул уҡ ваҡытта уның башҡорттар араһына үҙ илселәрен ебәреүе, шулай уҡ башҡорт ырыуҙары бейҙәренең үҙ ирке менән Мәскәү власын таныуын белдереп, Ҡаҙанға илселек менән барыуҙары бик мөһим дипломатик сара рәүешендә ҡабул ителә. Был осраҡта Нуғай ханының рус батшаһына дәғүә белдереүе өсөн ерлек булмай. Нуғай ханлығынан бик күп йәбер-золом күреп йәшәгән башҡорт ырыуҙары өсөн дә ошондай ҡарарға килеү халыҡ киләсәге өсөн хәл иткес ваҡиға булып тора.

▶ **В. САМОРОДОВ:** Туҡтауһыҙ һуғыш алып барыу көслө дәүләттәрҙең дә ҡеүәтен кәметә, рус батшаһы быны яҡшы аңлағандыр. Ҡаҙан ханлығын тармар итеп, ул үҙенең сәйәси стратегик маҡсатына өлгәшә, ә башҡорттар менән килешеү аша яңы мөнәсәбәттәр урынлаштырыу ике яҡ өсөн дә бик файҙалы аҙым була. Башҡорттар ҙа көслө рус дәүләте ҡулы аҫтында үҙҙәрен һаҡлап ҡалыу мөмкинлеген тапҡан.

**Рәсәй дәүләте алып барған хәрби кампанияларҙа ҡатнашыу, илде дошмандарҙан һаҡлау халыҡта патриотизм тойғоһо уятҡан. Беҙҙә ватансылыҡ традицияһының көслө булыуы ошо уртаҡ тарих менән бәйлеләр?**



▶ **В. САМОРОДОВ:** 1812-1814 йылдарҙа башҡорт атлы полктарының Рәсәй суверенитеты өсөн ҡаһармандарса һуғышыуы башҡорттарҙың ил алдындағы бурыстарын намыҫ менән үтәүен бик асыҡ сағылдыра. Быны шулай уҡ рус-башҡорт мөнәсәбәттәренең иң күренекле һәм ихтирамға лайыҡ мәлдәренең береһе, тип атап була. Хәрби хеҙмәттәшлектә башҡорттарҙың хәрби ҡатламы барлыҡҡа килә, һәм улар, күп яуҙарҙа ҡатнашып, дан ҡаҙана. Бөйөк Ватан һуғышында рус хәрбиҙәре күпселекте тәшкил итһә лә, улар менән иңгә-иң терәшеп, башҡа халыҡ вәкилдәре лә батырлыҡ өлгөләре күрһәтә. Ватансылыҡ илгә хәүеф янаған мәлдәрҙә көсәйеп, халыҡтар берҙәмлеген нығыта.

▶ **Н. МӘЖИТОВ:** Рәсәйгә дошман яуы ябырылған мәлдәрҙә башҡорттар иҫ китмәле рухи ынтылыш кисереп, ил бәләһен үҙ ҡазаһы кеүек ҡабул иткән. Ошондай данлы яуҙарҙа уларҙың үҙаңында ватансылыҡ рухы өҫтөнлөк ала, был башҡорт фольклорында ла сағылыш тапҡан. Башҡорт яугирҙарының рус ғәскәрҙәре менән француздарҙы еңеүе тарихи йырҙарыбыҙҙа данлана. 1905 йылдағы рус-япон һуғышы рустарҙың "Варяг"ы менән бер рәттән, башҡорттарҙың мәшһүр "Порт-Артур" йырын тыуҙырған.

▶ **В. САМОРОДОВ:** Яугирлыҡ, ҡаһарманлыҡ - башҡорттарҙың генетик сифаты кеүек ҡабул ителә. Улар үҙҙәрен һаҡлай, дошманға ҡаршы тора алмаһа, тарих аренаһынан төшөп ҡалыр ине. Унан һуң, башҡорттарҙың Рәсәйҙе үҙ Ватаны итеп ҡабул итеүе лә бик мөһим: россиянлыҡ - башҡорт патриотизмының иң күркәм сағылышы ул.

**Беҙ элегерәк халыҡтар дуҫлығы тураһында һөйләһәк, бөгөн уның урынына толерантлыҡ тигән замана төшөнсәһен ҡулланабыҙ. Был төшөнсәләрҙең асылын нисек аңлатаһығыҙ?**

▶ **В. САМОРОДОВ:** Халыҡтар дуҫлығын идеологик төшөнсә тиһәләр ҙә, ул ысынбарлыҡ күренеше булды. Бына спорт өлкәһендә конкурентлыҡ нисек көслө, әммә беҙ, совет осоро спортсылары, шул саҡта тыуған спорт дуҫлығына әле лә тоғробоҙ. Бер-беребеҙҙең хәлен белешеп торабыҙ, осраша ҡалһаҡ, ысын күңелдән ҡыуанабыҙ. Ғөмүмән, был һорауға фәлсәфәүи күҙлектән ҡарарға кәрәктер. Һәр кемгә ғүмер бер генә бирелә, уны кешеләрсә йәшәп уҙғара алыу фарыҙ. Донъя үҙгәреп тора, һәр быуынға ниндәйҙер ауырлыҡтар аша үтергә тура килә. Уларҙы тик дөйөм хеҙмәт менән, уртаҡ маҡсаттарға бергәләшеп ынтылыу аша еңеп сығып була. Бер-береңә ярҙам итә алыу, ауыр мәлдәрҙә башҡалар менән туғандарса бүлешеп йәшәй алыу мөһим. Бындай саҡтарҙа милләт айырымлыҡтары бөтөнләйгә иҫәпкә алынмай. Хәҙер күп ауыл-ҡалаларҙа, коллективтарҙа төрлө милләт кешеләре ҡатнашып, аралашып йәшәй, улар араһында дуҫтарса бәйләнештәр урынлаша, бер-береһен хөрмәт итеү тойғоһо көсәйә. Бер-береңә ихтирам менән ҡарау, теләктәшлек, ярҙамсыл булыу, кемде лә булһа һис бер кәмһетмәү - былар барыһы ла шул уҡ толерантлыҡ тигәнде аңлата бит.

**Шулай итеп …**

**Берҙәмлек, ватандашлыҡ тойғоһонан башҡа килешеп, һыйышып йәшәү ҙә мөмкин булмаҫ ине. Башҡортостан халыҡтары ошо хәҡиҡәткә тоғролоҡ һаҡлап йәшәй. Шуға ла бит халҡыбыҙҙың ихласлығы, киң күңеллелеге, ҡунаҡсыллығы билдәһе булып, Ағиҙел ярында Халыҡтар дуҫлығы исемен йөрөткән мәңгелек һәйкәл күккә олғашып тора.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ҺЫЙЫНДЫРАҺЫҢ ДА...

# БАШҠОРТ МӘККӘҺЕ ҺИН,

## рух ҡәлғәһе, ғәзиз Өфөм

**Беҙҙе, ауылда тыуып үҫеп, баш ҡалала йәшәргә, эшләргә килеүселәрҙе, Өфө бер ҡасан да ҡолас йәйеп ҡаршы алмай. Оло ауырлыҡтар аша барыһын да үҙенә табырға, үҙенә юл ярырға тура килә. Кемдер ауырлыҡтарға сыҙамай, кире үҙ ягына ҡайтып китә, кемдер Өфөнөң аяуһыҙлығына иғтибар итмәй, йәшәй бирә. Берәүҙе лә бында көсләп тотмайҙар, ҡыумайҙар ҙа... Шулай ҙа Өфөлә үҙ кеше булып китеү өсөн ниндәй булырға кәрәк һуң? Ошо һорауға яуап эҙләп, Өфөлә төпләнгән, унда үҙ урынын тапҡан кешеләрҙең фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**



▸ **Тамара ҒӘНИЕВА, шағирә:** Өфө - һәр башҡорт өсөн рух ҡәлғәһе. Ярты Рәсәй буйлап һибелеп ултырған башҡорт ауылдарының ҡайһыһына ғына барһаң да, унда йәшәүселәр Өфөнән килеүсегә өмөт менән баға: Өфө нисек йәшәй, унда ниҙәр бар, ныҡмы әле ниғеҙебеҙ, милләтебеҙ киләсәге хаҡында ҡайғыртыусы шәхестәребеҙҙең күңеле ҡайтмағанмы? Силәбе, Самара (Һамар тигән һүҙ булмай, Сәмәрә атамаһылыр был ҡала), Һарытау, Ырымбур, Ҡурған, Пермь өлкәләре майҙандарын биләгән һәм Башҡортостан, башҡорт мәҙәниәте һәм сәйәсәтенән алыҫ көн күргән милләттәштәребеҙ менән осрашыуҙарҙан мин һәр саҡ һыҙланып ҡайтам. Үкенескә ҡаршы, улар Өфөнән алыҫ ғүмер итә.

Дөрөҫ, Өфө берәүҙе лә "өф" итеп ҡаршы алмай. Өфө - донъялағы бөтән мегаполистар кеүек үк, үтә етеҙ, туҡтап кемдеңдер хәлен белешергә ваҡыты булмаған, автоматлаштырылған хәрәкәткә көйләнгән текәрәк холоҡло ҡала ул. Мәңгелеккә ғашиҡ булған йәрендән яҙырға ҡурҡып, уның һәр холоҡфиғелен күңелең һәм зиһенең аша үҙләштереүгә, араларҙың һыуынмауы хаҡына яҙмышыңды бағышлағандағы кеүек, Өфөгә һыйып, уның ҡағиҙә-йолаларына, талаптарына күнеп, үҙ кеше булып китер өсөн тотош ғүмеренде һалырға тура килә. Өфөнө аңлау ҙа, яулау ҙа мөмкин түгел, Өфөнө тик яратырға ғына була. Бер тапҡыр сәхнәгә сығып, алҡыштар һәм алҡыштар ләззәтен кисергән, ана шул ғәжәйеп тойғоларҙан баш тартырға көсө етмәгән артист кеүек, Өфөнөң арбағыс көс-ҡөҙрәте үҙенән һине ысҡындырмай. Мин Өфөнө яратам, бындағы сәйәси, мәҙәни ығы-зығынан арып, "уф" тигәндәрем, ҡайҙалыр китеп олағырға хыялланған саҡтарым да юҡ түгел, әммә ике-өс көнгә командировкаға сығып китһәм дә, Өфөнө һағынам, Ағиҙел аша һалынған күперҙе яҡтыртҡан ут-тар мәрйене йөнгә ягыла, ул ут мәрйене самолеттан бигерәк тә арбағыс булып күренә, ә артабан ҡала эсе мәһабәтлеге, ғәзизлеге менән күңелгә һырыла. Өфөгә мин рәхмәтлемен, мин бында ғүмерлек дуҫтар таптым, улар ҙур ҡалала юғалып ҡалмаҫҡа ярҙам итте. Бөтәһе лә үҙем кеүек ауылдарҙан килгән яҡшы белемле, егәрле был замандаштарым Башҡортостан иленең башҡорт төйәге булыу статусын юғалтмау өсөн күңелен, аҡылын һалып йәшәүсе ғалимдар, яҙыусылар, табиптар, журналистар, уҡытыусылар, юғары сәнғәт әһелдәре, сәйәсмәндәр, үҙ һөнәрҙәренең оҫталары.

Өфөлә мин байтаҡ китаптар яҙҙым, уларҙың унауһы уҡыусылар ҡулында. Өфө мине шағир тип танымай, шикелле, әммә маҡтанмай әйтә алам: Башҡортостан - мине, мин Башҡортостанды яратам.

Өфөгә, меңдән ашыу йәшкә еткән сал ҡалаға, Йыһан орбитаһындағы урынын да, тотҡан ҡиблаһын да юғалтмай, башҡорт мәккәһе булып оҙаҡ йәшәүен теләйем.

▸ **Фәнис ИСХАҠОВ, хаҡлы ялда:** Өфө менән мине яҙмыш үҙе бәйләне. Бар ғүмерем ошо ҡала менән бәйле булды. Был ҡаланы беҙ һәр саҡ ҙур, матур ҡала, унда тик бәхетле кешеләр генә йәшәй, тип белдек, унда әләгергә хыялландыҡ. Бында беҙҙе һуғыштан һуң, Белорет районының Сермән балалар йортонан килтерҙеләр. Ауылда күргән яфаларҙан, аслыҡ-яланғаслыҡтан һуң Өфө ожмах кеүек ине. Балалар йортонда тәрбиәләндем, хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында белем алдым. Унан һуң Башҡорт дәүләт нефть-техник институтын тамамланым, кәләш алдым, ҡыҙым тыуҙы - һанай китһән, был ҡала менән күңелдә тик ыңғай хәтирәләр генә һаҡланған икән. Тап Өфөлә спортсы булып киттем, ҙур ерҙәрҙә хеҙмәт итергә тура килде, партия эшендә лә эшләнем - Өфө мине ғәзиз балаһылай күреп, һәр саҡ ҡурсалап, яҡлап торҙо, юлыма яҡшы кешеләрҙе сығарҙы. Өфө алдыма ҙур маҡсаттар ҡуйырға, белем алырға, кеше араһына сығырға ярҙам итте. Шуға ла Өфө мине йышыраҡ һөйөндөрҙө, тип тулы ышаныс менән әйтә алам. Шулай ҙа фатирһыҙ ыҙа сиккән ваҡыттарҙа көйөндөрҙө лә, тик һуғыш заманы балаһы булараҡ, был ауырлыҡтар сыныҡтырҙы ғына, тағы ла көслөрәк итте...

▸ **Зөлфиә ХАННАНОВА, шағирә:** Өфөлә бәләкәй саҡтан булырға тура килә ине, сөнки олатайым менән өләсәйем бында йәшәне, аҙаҡтан 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында, БДУ-ның филология факультетында белем алдым. Ҡалала тормош тиҙерәк аҡҡан, яңылыҡтар тиҙерәк килеп етә һымаҡ, шуғалыр ҙа һуңынан Белорет районында йәшәгәндә Өфөнө ныҡ юҡһына инем. Ун йылдан һуң Өфөгә кире әйләнеп ҡайтҡас, уны бөтөнләй икенсе яҡтан астым. Мин тормоштың алдыма яңынан-яңы маҡсаттар ҡуйып йәшәгән әүҙем позициялы кешемен, ҡыҫҡаһы, тормош уртаһында ҡайнап йәшәргә яратам. Был кемдеңдер һарыуын да ҡайнатҡандыр инде, шул саҡта башҡа һыймаҫлыҡ һүҙҙәр ишетеп, шаңҡып ҡалған мәлдәрем дә булды. Шулай ҙа Өфөнө мин бик яратам, кешеләрен дә үҙ күрәм, ул һәр миҙгелдә лә матур. Минең өсөн Өфө ҙур сынығыу мәктәбе булды. Үҙ көсөмә ышанырға, үҙемә таяныс булырҙай дуҫтарымдың ҡәҙерен белергә, кеше һүҙенән өҫтөнөрәк булырға өйрәндем.

▸ **Салауат БЕЙЕШЕВ, программаласы:** Өфө минең өсөн Ер йөҙөндәге иң матур ҡала. Бала саҡта, Өфө, тиһәләр, иң тәүҙә Салауат Юлаев һәйкәле күҙ алдына баҫа торғайны. Студент саҡ шаулап-гөрләп үтте, Башҡорт дәүләт авиация-техник университетының 1-се ятағында уҙған йылдар иң күңелле саҡ булғандыр. Бында эшләй, йәшәй башлағас, Өфөнө икенсерәк юҫыҡтан асырға тура килде. Шулай ҙа Өфөгә бер үпкәм дә юҡ. Белем алдым, ҡатыным менән икебеҙ ҙә Әбйәлил районынан булһаҡ та, Өфөлә осраштыҡ, улдарым бында тыуҙы. Хәҙер минең өсөн Өфө - ул ғаиләм, эш урыным, үҙ йортом. Бында эшкә ҡалғас, иң тәүге маҡсат, әлбиттә, торлаҡлы булыу ине. Бының өсөн күп эшләргә, төрлө юлдар эҙләргә тура килде, әммә, ирмен, тиғән ир кеше үҙенә торлаҡты үҙе табырға тейеш, тип уйлайым.

Кеше, бәхеткә күрә, насар нәмәне, тормоштоң кире, ҡараңғы яҡтарын тиҙ онота. Ваҡыт үтеү менән күңелдә Өфө менән бәйле тик яҡты хәтирәләр генә тороп ҡалған. Һәр кеше ниндәйҙер ҡыйынлыҡтар аша үтеп, сынығыу алырға тейеш. Ата-әсә янында үҙаллылыҡҡа өйрәнеп булмай. Мин бер ҡасан да, үҙем ыҙаланым, балаларым рәхәттә йәшәһен, тиғән кешеләрҙе аңламаным. Улдарым үҫкәс, уларҙы сит ҡалаға ебәреп уҡытасаҡмын. Һәр кем үҙенә тейешен үҙ ине менән күтәрергә тейеш, шул саҡта ғына ул үҙе көслө, рухы ныҡ була.

▸ **Флүрә ИҪӘНҒОЛОВА, хаҡлы ялда:** Өфөгә бынан ярты быуат элек ҙур хыялдар, өмөттәр менән килгәйнем. Мәктәпте көмөш миҙал менән тамамлаған кеше булараҡ, Башҡорт дәүләт университетына еңел генә уҡырға инеп киттем. Ятаҡта 16 ҡыҙ йәшәйбеҙ, унда уҡырға түгел, ял итергә лә форсат юҡ, шуға фатирға сығып китергә тура килде. Унда һыу ташырға, өйҙө мейескә ут яғып йылытырға кәрәк ине. Әхирәтем менән төндәрен утын эҙләп йөрөгән саҡтар ҙа аҙ булманы. Шулай ҙа был ваҡыт иң күңелле, иң матур мәл булып хәтерҙә ҡалған. Мин уҡып бөткән йылдарҙа Өфөлә башҡорт теле уҡытыусыларына хәҙерге кеүек эш юҡ ине, шуға мин оҙаҡ йылдар тәрбиәсе булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡас ҡына мәктәптә башҡорт телен уҡыттым.

Уйлап ҡараһаң, бөгөн бит проблемалар тағы ла күберәк. Ул саҡта бушлай белем алыу мөмкинлеге булды, уҡып бөткәс, эшкә лә урынлаштыралар ине. Йәштәр торлаҡһыҙ бөгөн, шуныһы күңелде ҡыра. Беҙгә, ирем милицияла эшләгән саҡта, бушлай фатир бирҙеләр, ул саҡта Хрущев ябай кешеләргә торлаҡ төҙөттө. Ә хәҙер байҙар өсөн әллә ниндәй зиннәтле йорттар төҙөп ултыртып ҡуялар, ябай кешенең уны һатып алыу өсөн аҡсаһы ла етмәй.

Өфө мине бар нәмәне лә өрөп ҡабырға, үҙенде, халҡыңды яҡлап һүҙ әйтергә лә өйрәтте...

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

### *Аһ, баш ҡала!..*

*Бер ҡулымда һынар сумаҙаным,*
*Бөртөк кенә балам етәктә.*
*Ҡасанираҡ сәфәр сыҡтым шулай*
*Өфөләргә ғүмер итмәккә.*
*Аһ, баш ҡала!*
*Уй-хистәрем тала -*
*Кемгә терәк, кемгә таш диуар.*
*Дөрләй бында ниндәй интригалар,*
*Һүндерелә ниндәй ярһыуҙар.*

*Теклэп уҙҙым һанһыҙ тәҙрәләргә:*
*Тик берене миңә булһа һуң.*
*Тыштан түгел, эстән ҡарап тороп,*
*Күҙәтер ҙә инем донъяһын.*

*...Тәҙрә уйҙым.*
*Ана, ҡояш аулай,*
*Ай уйнаҡлай аулаҡ төндәрен.*
*Бигүк ҡотһоҙ түгел өйгән өйөм,*
*Өҙөләп бара нинә индәрем.*

*Өҙөләп кенә төшөп бара иңем,*
*Эҙләгәнем микән ишелде.*
*Бәйгеләрҙә майҙан тотайым тип,*
*Ни хәлдәргә төшөп бөтөлдө.*

*Мин һыймалы берәр күңел юҡмы?*
*Йәнегеҙгә өйҙәш итегеҙ.*
*Юғиһә, тим, киттем сәфәр сығып,*
*Үҙегеҙгә булыр Өфөгөҙ.*

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

### *Ихласлығым өсөн үҙ итер*

*Өфө миңә еңел бирелмәне,*
*Ул торманы мине "өф" итеп,*
*Нахаҡ һүҙҙәр, мәкер менән тәүҙә*
*Күңелемде алды өшөтөп.*

*Өфөм! Өфөм! Көсһөҙ түгел дә мин -*
*Йөрәгемә таптым дарыуҙар.*
*Ғәйбәттәргә иҫем китмәй хәҙер,*
*Һөйләмәйҙәр уны арыуҙар.*

*Мин еңелер өсөн килдемме ни?!*
*(Үҙ еремдә баҫып торамын!)*
*Имеш-мимеш, ялған һүҙгә ҡаршы*
*Тик йылмайыу минең ҡоралым.*

*Күңелемә ситен тарсылыҡтар,*
*Йырлы йәнем - оло биләмә.*
*Үҙем кеүек йырға ғашиҡ йәндәр*
*Йыйылырҙар эргә-тирәмә.*

*Барыһына етер күңел нурым,*
*Барыһына йылы һүҙ етер.*
*Гелән мине ҡағып тормаҫ Өфө,*
*Ихласлығым өсөн үҙ итер!*

# КӨРӘШСЕЛӘР АУЫЛДАРҘА ҮҪӘ,

## тик уларҙы күреүселәр генә юҡ…



**Милли көрәш тураһында һүҙ йөрөткәндә, иң тәүҙә һабантуйҙар күҙ алдына килә. Байрамға төҫ биреүсе, йән өрөүсе төп сара, ысынлап та, көрәш бит. Майҙанда бил һынашҡан батырҙарҙы ҡарау һәр ваҡыт көсөргәнешле тамашаға әүерелә. Рух бөрҡөүе һәм мауыҡтырғыс булыуы менән көрәш һәр саҡ үҙенә йәлеп итә. Бөгөн ул милли спорт төрө булараҡ, яңырыу кисерә. Меңәр йыллыҡ тарихы булған милли көрәштең бөгөнгөһө һәм киләсәге, уны артабан үҫтереү юлдары тураһында милли көрәш буйынса Башҡортостандың күп тапҡырҙар абсолют чемпионы, ике тапҡыр Рәсәй чемпионы, өс тапҡыр Бөтә союз турнир еңеүсеһе Вәкил ИЛЬЯСОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Көрәшселәр майҙанға сыҡҡанда тамаша ҡылыусы ағайҙарҙың "Хәрәмләшмә, аяҡ салма..." кеүек һүҙҙәр менән йөпләп тороуын ҡыҙыҡһынып күҙәтә инем. Ғөмүмән, милли көрәштең үҙенсәлеге нимәлә? Тамаша булараҡ, ул ниндәй алымдары менән үҙенә ылыҡтыра?**

▸ Көрәш - ул тамаша ҡылырлыҡ булырға тейеш. Әгәр ҙә майҙанда бил һынашҡан батырҙарҙың көрәш алымдары тамашасыла бер ниндәй ҙә ҡыҙыҡһыныу, хис-тойғо уятмай икән, былдай көрәштең бер фәтүәһе лә юҡ. Моңло йыр башҡарған йырсыны яратып тыңлаған кеүек, оҫта көрәшкән батырҙы ҡарарға ла халыҡ үҙенән-үҙе йыйыла. Көрәш тап ана шул матур алымдары, техник яҡтан оҫта башҡарылыуы менән кешене ылыҡтырырға, һоҡландырырға, ҡыҙыҡтырырға, үҙенә һөйөү уятырға тейеш. Егеттәрҙең таһыллығына, йылғырлығына, мөһәбәт кәүҙәһенә ҡарап, атаәсәлә һоҡланыу тойғоһо менән бергә үҙенең балаһын ошо спорт төрөнә биреү теләге лә тыуырға тейеш. Ә инде келәмдә тумарлашып йөрөп, көрәшселәр бер-береһен йәрәхәтләү менән генә булһа, был күренеш ытырғаныуҙан башҡа бер нәмә лә уятмаясаҡ. Көрәшсенең көслө лә, таһыллы ла булыуы көрәштә бер-береһен тулыландырып килә. Береһе булып та, икенсеһе юҡ икән, еңеү яулап булмай.

Беҙҙең милли көрәштәге төп алым - дәғүәсене күтәреп алып күкрәк аша ырғытыуҙан ғибәрәт. Ҡайһы саҡта көрәшсе дәғүәсеһен арҡаһына ятып ырғытырға мәжбүр була. Быны ошо алым яңы индерелгән ҡағиҙә буйынса тыйыла һәм көрәшсе уны өс тапҡыр эшләй икән, уға кисәтеү яһала. Ә был, үҙ сиратында, дәғүәсеңә мәрәй булып өҫтәлә. Хатта ҡайһы бер егеттәр тик ошоноң менән файҙаланып, еңеү яулай ҙа инде. Былдай ҡағиҙә индереү, бәлки, бер яҡтан дөрөҫтөр ҙә, сөнки ҡайһы берәүҙәр тигеҙ көрәшкән осраҡта, ялған әүҙемлек күрһәтеп, күтәреп алып ырғытыу урынына, тиҙерәк артына тартып йығырға тырыша. Был көрәштең йәмен ебәрә. Ошо күңелһеҙ күренештәрҙе булдырмаҫ өсөн яңы ҡағиҙәләр индерелде лә инде. Нисек кенә булмаһын, милли көрәш элек-электән килгән төп алымдарын һаҡлап килә.

**Үткән бер һөйләшеүҙә һеҙ, милли көрәштең абруйы көрәшеүселәр иҫәбе менән дә үҫә, тигәйнегеҙ. Бөгөн һеҙ уны нисек баһалайһығыҙ, беҙҙең көрәшселәрҙең профессионаллеге етерлек кимәлдәме?**

▸ Нисек кенә булмаһын, көрәшеүселәр һаны арта бара. Оҫталыҡ буйынса ла таһыллы ғына егеттәр үҫеп сыҡты. Элек көрәш үҙенсә көслө булһа, әле үҙенсәлекле көрәш алымдары арсеналы арта. Мәҫәлән, Альберт Рәхмәтуллин, Наил Мөхәмәтйәровтарҙың үҙҙәренә генә хас көрәш алымдары бар. Беҙҙең көрәштә аяҡ менән эш итергә ярамаһа ла, күтәреп алыр өсөн аяҡты файҙаланырға була. Был егеттәр аяҡты бик оҫта файҙалана белә. Ул үҙенә күрә бик ҡатмарлы алым һәм уларҙыҡы бик матур һәм тәбиғи килеп сыға. Көрәштә кемдер етеҙлек, кемдер көс, кемдер таһыллыҡ менән алдыра. Ғәҙәттә, тренерҙар дөйөм ҡабул ителгән билдәле булған төп алымдарға таянып өйрәтә башлай. Ә был көрәшселәр үҙҙәре үҙләштергән яңы көрәш алымы менән еңеү яулай ҙа инде. Мәләүез егете Альберт Рәхмәтуллин Ергән ҡасабаһында спорт мәктәбендә тренер булып эшләй. Уның тренеры - ваҡытындағы көслө көрәшсе Фәнүр Ғәйнетдинов. Салауат районы егете Наил Мөхәмәтйәров Башҡорт дәүләт аграр университетында эшләгән Фәнис Уразбахтинда шөғөлләнә. Фәнис Харрас улы етмеш йәштә булһа ла, әле һаман йәштәрҙе көрәшкә өйрәтеүен дауам итә. Шулай уҡ Фәнис Ҡотдосов та, оло уҡ йәштә булыуына ҡарамаҫтан, аҙнаһына өс тапҡыр Өфөнән Благоварға йөрөп күнекмәләр уҙғара. Беҙҙең көрәш тап ана шундай фанаттар арҡаһында йәшәп килә лә инде.

**Башҡа спорт төрҙәренән айырмалы рәүештә, милли көрәштең үҙенә бик ауыр юл ярыуы тураһында ишетеп торабыҙ. Уның абруйын үҫтереү өсөн тағы ла ниндәй саралар күрергә мөмкин, тип уйлаһығыҙ?**

▸ Яңыраҡ Яр Саллыла үткән көрәш буйынса турнирға барып ҡайтҡайныҡ. Унда илле район ҡатнашты. Һәр ауырлыҡта алтмыш-етмеш кеше, йөмғеһе һигеҙ ауырлыҡ категорияһында биш йөҙҙән артыҡ көрәшсе сығыш яһаны. Алты келәмдә ике көн буйы олимпия системаһы буйынса көрәш барҙы. Бына был, исмаһам, күмәк һәм юғары кимәлдә ойошторолған көрәш. Шулай уҡ тамашасы залы ла халыҡ менән шығырым тулы булды. Тимәк, халыҡ үҙ милли спорт төрөнә битараф түгел. Уларға маҡтау һүҙҙәре генә әйтергә ҡала.

Ә беҙҙәге күп райондарҙа ярышҡа килеп, урын яулап алырлыҡ түгел, ҡатнашырлыҡ та көрәшселәре юҡ. Райондарҙа көрәште күтәрергә кәрәк. Беҙҙең көрәштең киләсәге - ауылда. Ҡайһылыр баланың бәлкәйҙән таһыллығы, һәләте, көсө булырға мөмкин һәм ул уны ҡайҙа ҡулланырға белмәй, ары һуғылып, бире һуғылып йөрөй. Үҙемдең миҫалымдан сығып әйтәм. Ваҡытында беҙҙең ауылда Әхмәт ағай Заһитов көрәш буйынса секция асып ебәрмәһә, мин дә, бәлки, көрәштең ни икәнен дә белмәҫ инем. Унда шөғөлләнгән егеттәрҙең көрәшкәнен ҡарап, күҙем ҡыҙып, ситтән күҙәтеп йөрөй торғайным. Бәлки, әлеге ваҡытта ниндәйҙер төпкөл ауылда буласаҡ Ильясов, Сабанов, Хафизовтар үҫеп киләлер? Бына ошондай балаларҙың һәләтен күреп, уны көрәшкә әйҙәүсе тренерҙар кәрәк. Ә был һорау аҡса мәсьәләһенә барып төкәлә. Тәжрибәле егеттәр барлығын бар, әммә улар башҡа өлкәлә эшләргә мәжбүр, сөнки тренерға түләнгән эш хаҡы ғаиләне аҫрауға ла етмәй. Әгәр ҙә беҙ республикабыҙҙың ҡала һәм райондарында тренер штаттары индереп, спорт секциялары булдырып, финанслау йүнәлтһәк, беҙ күпкә өлгәшә алыр инек.

Беҙҙә республика ярыштарында ауыр категорияла бишалты кеше ҡатнашһа, беҙҙең өсөн күп, тип иҫәпләнә. Ә ысынында, беҙҙә лә бар мөһәбәт кәүҙәле бәһлеүәндәр! Физик яҡтан таҙа, көрәшкә һәләтле, көслө егеттәр бик күп беҙҙә, тик ваҡытында был спорт төрөнә уларҙа ҡыҙыҡһындырыу тыуҙырылмаған, уның менән шөғөлләнмәгәндәр. Башҡорт дәүләт аграр университетында элек-электән милли көрәш секцияһы эшләп килә. Бихисап көрәшселәр ошо университетта белегенә көс йыйған, тәжрибә туплаған. Әле лә бик күп уҡыу йорттарынан студенттар бында килеп шөғөлләнә. Шуға ла милли көрәш секцияһын бөтән уҡыу йорттарында ла һис шикһеҙ республикаға кәрәк, тигән фекерҙәмен. Был осраҡта электән көрәш менән шөғөлләнгән егеттәр генә түгел, ә был спорт төрө менән бөтөнләй таныш булмаған студенттар ҙа ҡыҙығып китеп, унда йөрөй алыр ине. Киләсәктә төрлө өлкәлә эшләп тә, был спорт төрөн яҡшы аңлаған, уның киләсәге өсөн борсолған, уны үҫтереүгә үҙ өлөшөн индерергә теләгән белгестәр барлыҡҡа килер ине.

Бөгөн Башҡортостан Республикаһының Милли көрәш федерацияһы милли көрәштең географияһын киңәйтеүҙе, абруйын үҫтереүҙе төп маҡсат итеп ҡуйып, ошо йүнәлештә эш алып бара. Федерацияның бүлектәрен һәр ҡала һәм райондарҙа булдырырға кәрәк.

**Элекке замандарҙа көрәштә еңгән батырға арғымаҡ бүләк иткәндәр. Хәҙер уның елкәһенә тәкә һалалар. Көрәшсе абруйын һеҙ нисек баһалайһығыҙ?**

▸ Мин үҙем иһә утыҙ йыл көрәшеп йөрөнөм, әммә бер ваҡытта ла уның бүләге хаҡында уйланғаным булманы. Минең өсөн көрәшеү - үҙе үк ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо бирә. Барыһы ла матди ҡиммәткә генә әйләнеп ҡайтырға тейеш түгел, спортсыларҙы беҙ юғары ҡиммәттәр өлгөһөндә тәрбиәләргә тейешбеҙ. Ә шулай ҙа элек-электән майҙанда еңеүсе батырҙарҙың елкәһенә тәкә һалыу йолаһы булған. Һуңғы йылдарҙа тәкә янына ҡиммәтле бүләктәр ҙә ҡуя башланылар. Көрәшсене дәртләндереү призлары булырға тейеш. Үзбәктәрҙең һәр байрамы - туй булһынмы ул, бала тыуыу шатлығымы - көрәш менән үтә. Унда бәһлеүәндәр, йәғни көрәштә еңгән батырҙар хөрмәтле ҡунаҡ булараҡ саҡырыла. Беҙҙә лә көрәшселәргә ҡарата ошондай иғтибар булһа, бәлки, көрәшкә ылығыусылар күберәк булыр ине. Майҙанда еңгән батырҙарға ҡарата артабан шул йүнәлештә эшләү өсөн перспектива булдырырға кәрәк. Ул бер яҡтан, спорт менән шөғөлләнеүҙән туктаған спортсыға эш урыны, икенсе яҡтан, күп йылдар буйына туплаған оҫталыкты йәш быуынға еткерергә мөмкинлек бирер ине. Ғөмүмән, һәр спорт төрөндә лә бар ул проблема. Милли көрәште үҫтереү өсөн көрәшселәрҙең ышаныслы киләсәген хәстәрләргә кәрәк.

**Һуңғы ваҡытта уҙған турнирҙар һәм ундағы ҡаҙаныштар хаҡында һөйләп үтегеҙ әле?**

▸ Көрәшселәрҙең оҫталығын арттырыу өсөн ярыштарҙы күберәк уҙғарыу зарур. 8 майҙа, мәҫәлән, Өфө ҡала округы хакимиәтенең спорт комитеты һәм Өфө ҡалаһының Милли көрәш федерацияһы менән берлектә Еңеү көнөнә арнап милли көрәш буйынса асыҡ ҡала беренселеге үткәрҙек. Был сара, беренсенән, ветерандарыбыҙға хөрмәт йөҙөнән уҙғарылһа, икенсенән, көрәшсе егеттәребеҙгә байрам ойоштороу маҡсатынан эшләнде. Республикабыҙҙың егермегә яҡын ҡала һәм райондарынан йөҙгә яҡын көрәшсе йыйылды ул сараға. 60-70-80-90 килограмм һәм унан юғары - бөтәһе биш категория ауырлыкта ярыш уҙғарҙыҡ. Бағыусылар ярҙамы менән ярайһы ҡиммәтле генә призлар әҙерләнек. Байрамға йәм өҫтәп, концерт та ойошторҙоҡ. Ошо ярыш һөҙөмтәләре буйынса Екатеринбургка алып барасаҡ команда туплаяныҡ.

Екатеринбургта 30 майҙа Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы сиктәрендә "Урал" кубогына беренсе халыҡ-ара билбау көрәше буйынса турнир ойошторолдо. Был сарала 143 көрәшсе, биш илдән 19 команда ҡатнашты. Рәсәйҙең 15 төбәге спортсыларын ярышҡа сығарҙы. Беҙ Башҡортостандан милли көрәш һәм билбау көрәше буйынса ике команда алып барҙыҡ. Былтыр ҙа беҙ милли көрәш буйынса беренсе урын яулағайныҡ. Быйыл да бик матур сығыш яһап, ышаныслы еңеү яуланыҡ. Билбау көрәшендә Екатеринбургтан ҡала беҙҙең команда икенсе урынға сыкты. Майҙан батырҙарыбыҙ Рушан Ильясов, Альберт Рәхмәтуллин, Наил Мөхәмәтйәров, Юнир Ильясов, Юрий Сабанов үҙ ауырлыҡтарында беренселекте бирмәне. Венер Хәйбуллин, Рәдиф Аҡсурин, Әсләм Хафизов икенсе урын алды. Билбау көрәше буйынса Ринат Еникеев, Рөстәм Исламов - беренсе, Рөстәм Арыҫланов - икенсе, Иншар Килмөхәмәтов өсөнсө урын алды.

**Шулай итеп…**

**Көрәш - ул беҙгә ата-бабаларыбыҙ мираҫ итеп ҡалдырып йола һәм традициялар менән бер рәттән, милли хазинабыҙ ҙа булып тора. Бөгөн ул спорт төрө булараҡ үҫеш алған икән, беҙ уны тағы ла юғары кимәлгә күтәрергә, уны ил күләмендә танытырға тейеш. Нимә генә тимә, беҙ үҙ асылыбыҙға яҡын торған спорт төрө менән шөғөлләнергә тейешбеҙ. Милләт абруйы милли традициялар үҫеше менән баһалана түгелме?**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓*Беҙ уйҙарыбыҙҙы һәм эштәребеҙҙе бығаулап тороусы сылбырҙан ҡотолорға тейеш. Был аҡылды үҙеңдең балаларыңа бүләк ит, әсәлек бурысың шуны талап итә.*



*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

# КЕР ЙЫУЫУ МАШИНАҢ...

## һинән үс алырға ла мөмкин

**Электр сәйнүгенә тотоноуың була, боҙола ла ҡуя! Ә ни өсөн? Кемегеҙ ҡасан да булһа электр приборҙарын ҡулланған ваҡытта үҙенә ошо һорауҙы биргәне бар?**

Ә бөтә эш шунда: күңелһеҙ хәл килеп тыумаһын өсөн, техниканың хәүефһеҙлек ҡағиҙәһен белергә кәрәк. Ниндәй ҙә булһа прибор һатып алғанда, уны ҡулланыу ҡағиҙәһен иғтибар менән уҡып сыҡ. Унда мотлаҡ рәүештә техниканың хәүефһеҙлек ҡағиҙәһе яҙылған була. Әгәр ҙә ул юҡ йә сит телдә яҙылған икән, рус теленә тәржемә ителгән ҡағиҙәне биреүҙәрен талап ит.

Көнкүреш техникаһы үҙе менән һаҡһыҙ ҡыланғандары өсөн күпселек осраҡта нисек итеп үс ала? Ток менән һуға! Кер йыуыу машинаңдан зыян күрмәү өсөн өс әйберҙе эшләмәү сараһын күр: машина тоҡандырғандан һуң порошок һалыу һауытын йәки ишеген асма, агрегат эшләп торған ваҡытта программаны үҙгәртмә, машинаға ауыр һәм еүеш әйберҙәр һалма!

Әгәр туҙанлы урынға ҡуйһаң йәки артҡы ҡапҡасын асырға маташһаң, телевизор ҙа хәүеф сығанағына әүерелеүе ихтимал. Ә саң һурҙырғыс дымды һәм үтә ҡыҙҙырғанды яратмай! Микротулҡынлы мейес, электр плитәһе, үтек һәм башҡа ваҡ-төйәк әйберҙәр артыҡ көсөргәнеште күтәрә алмай, шуға ла уларға йышыраҡ ял бир!

Электр сәйнүктәре, плитәләре иғтибарһыҙлығыбыҙ өсөн йыш ҡына беҙҙе бешереп тә ала. Кәңәш ябай: улар менән эш иткәндә, иғтибарыңды ситкә йүнәлтмә!

Тағы ла бер мөһим кәңәш. Микротулҡынлы мейес, электр комбайны һәм башҡа көнкүреш техникаһы ултыртып ҡуйылған урындың ышаныслы һәм ныҡлы булыуы тураһында хәстәрлек күр.

*МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ*



# БӘХЕТЛЕ ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

## Балаңа мираҫ итеп үлемһеҙлек бүләк ит

- Был Ғаләмдә йәшәүсе һәр кемгә тәү баштан үҙ юлы тәғәйенләнгән. Тормоштоң ошо гигант картаһында үҙ юлыңды табып һәм йөрәк саҡырыуына ҡыйыу ҡушылып, йондоҙҙарға артыла алаһың. Һин балаларыңа кешенең тормоштағы эшмәкәрлеге үҙе менән ҡуша үлмәгәндә генә ул үҙенең ысын бөйөклөгөнә эйә була алыуын төшөндөр.

- Йәғни мираҫ тураһында һүҙ алып барғанда, һин уларҙан һуң ҡалған тормош эшмәкәрлеген күҙ уңында тотаһыңмы?

- Эйе. Кеше шундай итеп ҡоролған, уға үҙенә ҡарағанда күпкә өҫтөнөрәк бүтән нәмә өсөн йәшәргә кәрәк. Әгәр Портер менән Сарита ошо бер генә хәҡиҡәтте үҙләштерһә, тормошта күпкә өлгәшәсәк, һин үҙең аптырарһың әле бына. Мин ысын мәғәнәһендәге уңыш тураһында һүҙ алып барам. Мин бик шәп "BMW" йәки ҡиммәтле костюм менән уртаҡ мәғәнә йөрөткән уңыш тураһында әйтмәйем. Мин был донъяны нурға сорнаған һәм кешеләрҙе бер-береһенә яҡынайтҡан уңышты күҙ уңында тотам. Мин был донъяла йәшәгән бер ата-әсәгә лә хас булмағанса үҙ балаларың менән ғорурлана ала торған уңыш хаҡында әйтәм.

- Нимә тип әйтергә лә белмәйем, - тинем мин күҙҙәрем йәшкә тулышыуын тойоп.

- Һәр кемебеҙ ата-әсә генә түгел, кеше булараҡ та үҙенә: "Мин үлгәндән һуң тормошомдан нимә ҡала?" - тигән һорау бирергә тейеш. Беҙ киләсәк быуын хәтерендә ниндәй эҙ ҡалдырыуыбыҙ тураһында уйланырға тейешбеҙ. Мин, беҙ барыбыҙ ҙа Ганди йәки Тереза Әсә кеүек булырға тейешбеҙ, тип әйтмәйем. Әммә һәр кемебеҙ бөйөклөккә табан үҙ юлын үтергә тейеш. Тормош беҙҙең турала хәстәрлек күрмәй, тип зарланып йөрөүсе ваҡсыл мыжыҡтар булырға тейеш түгелбеҙ. Беҙ, бүтәндәргә миһырбанлыҡ һәм хәстәрлек күрһәтеп, үҙебеҙ был донъя тураһында хәстәрлек күрергә тейешбеҙ. Беҙ уйҙарыбыҙҙы һәм эштәребеҙҙе бығаулап тороусы сылбырҙан ҡотолорға тейеш. Беҙ, ниһайәт, үҙебеҙҙең ысын йөҙөбөҙгә ҡарарға ҡыйыулыҡ табырға тейеш. Бына былар барыһы ла, Кэтрин, ысын тормош. Был аҡылды үҙеңдең балаларыңа бүләк ит, әсәлек бурысың шуны талап итә. Тормошта был аҡылға таянып эш ит. Шул саҡта үҙеңде һәр ваҡыт бөйөк кеше итеп хис итерһең.

Бөгөн беҙҙең хушлашыу кисе. Мин Джон һәм балалар менән һаубуллаштым инде. Әлбиттә, һеҙҙең менән айырылышыуы ҡыйын, мин һеҙҙең йортта ғүмеремдең ахырына тиклем йәшәргә теләр инем, әммә маҡсатым башҡаса. Мин Сивананың бөйөк аҡыл эйәләренә улар биргән аҡылды бүтәндәргә таратырға һүҙ бирҙем. Ошо хеҙмәтемде дауам итергә тейешмен. Мин һине бик ныҡ яратам. Һин хәҙер "Ғаилә лидерлығының биш һабағы" аҡылына эйә булдың. Был аҡыл ғаиләңде тормоштоң бөйөклөгөнә алып барырға ярҙам итәсәк. Һин үҙеңдең иң ҡәҙерле кешеләрең өсөн генә түгел, ә уратып алған барлыҡ кешеләргә лә яҡты нур булып, аҡыллы лидерға әүерелдең. Хәҙер инде һин уларға был донъяла йәшәүебеҙ асылын аңлатырға тейешһең.

Шулай тине лә Джулиан залдан сығып китте. Буш кинозалда яңғыҙым күпме ултырғанмындыр, белмәйем. Минең йөрәгем юғалтыу һағышы менән тулғайны. Ниһайәт, урынымдан тороп, сығыу яғына йүнәлдем. Ишеккә етәрәк, Джулиан ултырған креслонан нимәлер иҙәнгә шылтырап төшкәнен ишеттем. Был Джулиан йәшәгән гараж өҫтөндәге бүлмәнең асҡысы ине. Уға: "Аҡыл асҡысы һинең йортоңда урынлашҡан" тигән яҙыу ҙа ҡыҫтырылған. Өйгә ҡайтып етеү менән тәүҙә гаражға табан йүнәлдем. Минең бында килеремде белгәндәй, Джулиан утты һүндермәй ҡалдырғайны. Был бәләкәй генә, әммә идеаль тәртип һаҡланған бүлмәгә килеп инеү менән ундағы картинаға һушым китте. Бүлмә ағайым тарафынан яҡшы китапханаға әүерелдерелгәйне. Матур кәштәләрҙә затлы тышлы китаптар тигеҙ генә итеп теҙелгән. Бүлмәлә таралған сандал ағасының хуш еҫе тыныслыҡ һәм рәхәтлек менән биләй. Китаптарға күҙ йүгертеп сыҡтым, улар араһында Эпиктеттың "Тормошҡа нәсихәттәр"е, Марк Аврелийҙың "Уйланыуҙар"ы һәм Сенеканың "Стоик хаттары" кеүек китаптар бар ине. Бында шулай уҡ Джулиандың беҙгә ҡалдырған хатын да таптым:

"Һеҙгә булған һөйөүмде, Портер, Сарита һәм Джон, һүҙ менән генә аңлатып бөтөрлөк түгел. Быны эшләргә лә йыйынмайым. Уның урынына һеҙгә үҙем белгән иң ҙур бүләк - аҡыл бүләк иткем килә. Был китапханала иң кәрәкле китаптарҙы таба алаһығыҙ. Мин был китаптарҙы Портер менән Саритаға бүләк итәм. Джон, һин балаларыңдың уңышына әллә күпме тапҡыр ҡыуанырһың һәм улар менән ғорурланырһың әле, быға минең иманым камил. Был матур китаптарҙы уҡығанда, мине иҫкә алһағыҙ, бик шат булырмын".

Хат аҙағында миңә ҡарата яҙылған һүҙҙәрҙе уҡыным:

"Лидерлыҡта һәм мөхәббәттә иң изге теләктәр менән ағайың Джулиан".

**Робин ШАРМА.**

**Шулай итеп... "Мәңгелек хәҡиҡәт" рубрикаһы аҫтында Төньяҡ Американың лидерлыҡ мәсьәләре буйынса алдынғы белгесе Робин Шарманың "Үҙенең "феррари"һын һатҡан монахтан ғаилә лидерлығы һабаҡтары" тигән донъяға билдәле китабын тәҡдим иттек. Матди байлыҡҡа, юғары вазифаға, йәмғиәттә тотҡан урынға эйә булыу әле ул ысын бәхет төшөнсәһен аңлатмай. Тормошта, ғаиләлә уңыш ҡаҙаныу өсөн иң тәүҙә эске донъяңа күҙ һалып, уны тәртипкә килтереп, күңел матурлығына һәм рухи бөйөклөккә ынтылырға кәрәк. Шул саҡта үҙеңдең дә, яҡындарыңдың да тормошо сафлыҡҡа, нурға сорналыр, тормош мәғәнәһе, йәшәйеш асылы асыҡ төҫ алыр. Был донъяла беҙ ваҡытлыса килгән ҡунаҡ булыуыбыҙға төшөнгәндә, мәңгелек ҡиммәттәрҙең нимәлә икәнен аңлауы ауыр түгел. Ошо хаҡта әйтергә теләгәйне лә инде автор. Уның баланы лидер итеп тәрбиәләүгә ҡарата әйтелгән аҡыллы фекерҙәре, файҙалы кәңәштәре һеҙгә лә ярҙам иткәндер, тип уйлайбыҙ. Әгәр ҙә был яҙмаларға ҡарата уй-фекерҙәрегеҙ тыуһа, яҙып ебәрегеҙ. Бәлки, был яҙмаларҙы дауам итеүсе автор ҙа табылыр арағыҙҙа?**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Маҡсатың аныҡ билдәләнгән булһын

Боронғо бер риүәйәттә: "Асыҡлыҡ булмаған ерҙә, халыҡ үлә", - тип әйтелә. Был, тимәк, һәр кем ҡәнәғәтлек алыу өсөн хыялға һәм ниндәй ҙә булһа маҡсатҡа ихтыяж кисерә, тигән һүҙ. Әгәр беҙҙең ниндәй ҙә булһа аныҡ маҡсатыбыҙ юҡ һәм беҙ ҡайҙа барырға белмәйбеҙ икән, һуңғы сиктә үҙебеҙ теләмәгән урынға юлығабыҙ. Маҡсат ҡуйыу һәм уға өлгәшергә тырышыу беҙгә тыныслыҡ һәм тулы энергия һаҡларға ярҙам итә, тормошобоҙҙо тағы ла ҡыҙыҡлы һәм файҙалыраҡ итә.

Флоренс Чэдвик маҡсат ҡуйыу ни тиклем мөһим булыуын үҙенең миҫалында асыҡ сағылдыра. Ул Көньяҡ Калифорнияла Каталинск боғаҙын йөҙөп сығып, күп тапҡырҙар рекордтар ҡуя. Унан һуң Ла-Маншты йөҙөп сығып, шәхси рекорд ҡуйырға уйлай. Йөҙөү билдәләнгән көндө Чэдвик ҡаршылыҡтарға тап була - диңгеҙҙә көслө тулҡын ҡуба. Әммә быға тиклем Атлантик океанда күнекмәләр яһап, физик формаһын яҡшыртҡас, ул ҙур тулҡындар менән көрәшергә әҙер була. Һауа торошо насар булғанлыҡтан, ул ныҡ ҡына һалҡын алдыра. Был да үҙенә күрә проблема булып тора, тик әлеге күнекмәләр үҙенекен эшләй. Ул һалҡын һыуға өйрәнгән була, ә тренерҙар стихиянан һаҡлар өсөн уның тәненә май һөртә. Етмәһә, Чэдвиктың тренерҙары кәмәлә уның эргәһенән йөҙөп барып, уны эҫе аш менән тәьмин итә ала.

Чэдвик һәм уның тренерҙары барыһын да ҡайғыртҡандай булған, тик бер нәмәне - томан булыу ихтималлығын күҙ уңынан ысҡындырған. Ярға яҡынайған һайын, томан ҡуйыра барған һәм бер-ике метрҙан ары бер нәмә лә күренмәй башлаған. Тренерҙары күпме генә тауыш биреп, ҡеүәтләү һүҙҙәре яуҙырмаһын, Чэдвик алға табан көскә йөҙгән. Диңгеҙҙә саҡ ҡына тулҡынланыу булһа, уға тулҡындар ҙур-ҙур башнялар кеүек тойолған. Һыуыҡ һыуҙан Чэдвиктың ҡулдарын, аяҡтарын көҙән йыйыра башлаған. Ҙур тулҡындар менән көрәшкәндә, уның мускулдары тартышҡан. Һуңғы сиктә, ул тренерҙарынан уны кәмәгә ултыртыуҙарын һәм ярға сығарыуҙарын һораған.

Аҙаҡтан журналистар унан, рекорд ҡуйыу өсөн геройҙарса тырышыуҙан туҡтағанда ҡаршы яҡ ярға сығып етергә аҙ ғына ҡалғанын белдеңме, тип һораған. Ул бының үҙе өсөн бер ниндәй ҙә әһәмиәткә эйә булмауын белдерә. "Аңлайһығыҙмы, - ти ул, - мин күҙ алдымдан маҡсатымды юғалттым. Мин уның аңымда нығынып еткән булыуына ышанып етмәйем".

Маҡсат күренмәй башлаһа, беҙ уны тоймайбыҙ. Хатта беҙ бик яҡшы әҙерләнеп, эшмәкәрлек төрөнә ҡарата һәләтебеҙ булһа ла, тырышлығыбыҙҙы дөрөҫ йүнәлештә алып бармайбыҙ икән, уның тормошта кәрәкле булған энергиябыҙҙы һурып алыуы ихтимал. Беҙҙең бер ҡулса эсендә әйләнеп йөрөп, әллә күпме ваҡытыбыҙҙы, аҡсабыҙҙы һәм башҡа сараларҙы юғалтыуыбыҙ мөмкин. Тормоштағы ынтылыштарыбыҙға аныҡ, конкрет маҡсаттар билдәләмәһәк һәм был маҡсаттарға асыҡлыҡ индермәһәк, ҡалтыранып, уңышһыҙлыҡ кисереүебеҙ ихтимал.

Гольф уйынсылары өсөн "Ҡарашыңды тупта тот" тигән һүҙҙәр һәр ваҡыт классик кәңәш булып тора. Профессионалдар ҡараштан ситтә булған тупты атып булмауын яҡшы белә. Уйында аныҡ маҡсат билдәләү менән уға өлгәшеү ысулдарын эҙлә һәм барыһына ҡарағанда ла яҡшыраҡ килеп сығырҙай процесс картинаһын күҙ алдына килтер. Маҡсаттар ҡуй, уларға өлгәшеү өсөн нимә талап ителә, шуны эшлә, һәм һин уңыш ҡаҙанырһың.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Конкурс: "Башҡортостандың ете мөғжизәһе"

**"Киске Өфө" гәзите "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" тигән конкурс иғлан итте. Ул конкурс "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Сәләм" иждад берекмәһе менән берлектә алып барыла.**

Конкурс өс этапта үткәреләсәк. Иң тәүҙә (июнь аҙағына тиклем) Башҡортостаныбыҙҙағы мөғжизә булырҙай бар нәмәне - тәбиғәт объекттарын, тарихи, мәҙәни, сәнғәт әйберҙәрен барлап сығайыҡ. Һәр кем үҙе тәҡдим иткән объект тураһында һүҙ әйтә, уны үҙенең дәлилдәре менән яҡлай, тауыш бирә.

Икенсе этап июлдән башлана һәм беренсе этапта тәҡдим ителгән объекттар араһынан 14-е һайлап алынып, артабан уларға тауыш биреү хаттар аша ла, редакция телефоны - **252-39-99**, **246-03-24**, "Киске Өфө" гәзите сайты - **www.kiskeufa.ru**, шулай уҡ "Сәләм" иждад берекмәһе телефоны - **251-73-91**, **251-90-44**, "Сәләм" иждад берекмәһе сайты - **www.saljam.ru** аша ла атҡарыласаҡ.

Өсөнсө этапта жюри "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында еңеүселәрҙе билдәләйәсәк. Еңеүселәр махсус ойошторолған кисәлә хәбәр ителәсәк.

**Шулай итеп, "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында Башҡортостаныбыҙ өсөн визит карточкаһы булырҙай, уны донъяла танытырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи объекттар ҡатнашырға тейеш. Һеҙҙән хаттар, мәҡәләләр көтәбеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## ОҘОН КӨЙҘӘРЕБЕҘ...

Конкурсҡа мин башҡорт халҡы ғына тыуҙыра алған һәм ул ғына бөтә донъя цивилизацияһына бүләк итеүгә өлгәшкән ғәжәйеп бер феномен - башҡорттоң оҙон көйөн тәҡдим итәм! Ер йөҙөндә йәшәгән башҡа бер милләттә лә булмаған беҙҙең "Урал", "Буранбай" кеүек көйҙәребеҙ бар. Бөйөк композитор булған халҡыбыҙ. Ошо үҙе мөғжизә түгелме һуң?!

Һөнәрем буйынса геолог булараҡ, мин шуны ла әйтмәй булдыра алмайым: хәҙерге заманда беҙҙең Башҡортостаныбыҙ Рәсәйҙең иң үсешкән, иң алға киткән төбәктәренең береһе икән, бының өсөн беҙ беренсе нәүбәттә ер аҫтының нефть, алтын, төҫлө металдар кеүек хазиналарына бурыслыбыҙ, рәхмәтлебеҙ. Ер аҫтындағы байлыҡтарыбыҙ Аллаһы Тәғәләнең беҙгә биргән ғәжәйеп бүләге түгелме ни?! Дөйөм алғанда, Башҡортостаныбыҙ үҙе тотош мөғжизә. Шуны күрә, тоя белһәк ине.

**Басир МӘҺӘҘИЕВ.**

## БАТЫРЫБЫҘ ҺӘЙКӘЛЕ...

Мин "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" исемлегенә милли батырыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәлен тәҡдим итергә булдым. Башҡорт халҡын атһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмаған кеүек, башҡорт илен дә Салауат Юлаевһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Бөгөн Салауат Юлаев һәйкәле Башҡортостандың гербын биҙәүсе эмблемаға әйләнде һәм республикабыҙҙың визит карточкаһы булып тора. Икенсенән, Салауат Юлаев һәйкәле Рәсәйҙә һыбайлы һәйкәлдәрҙең иң ҙуры. Ошоларҙан сығып, Салауат Юлаев һәйкәле лә "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" исемлегендә мотлаҡ булырға тейештер, тип уйлайым.

**Владик ҠЫҘРАСОВ (Күгәрсен районы Аҙнағол ауылы).**

## ҠӘНИФӘ ҺӘМ ҠУҢЫР БУҒА ЮЛЫ

Ете мөғжизә исемлегенә мин Ҡәнифә һәм Ҡуңыр буға юлдарын өҫтәр инем. Ул ике юлды бер үк тип иҫәпләүселәр ҙә бар. Был улай түгел, Ҡәнифә юлы - Һаҡмар йылғаһының һул яғынан, ә Ҡуңыр буға юлы Урал һыртынан үтә.

Конкурсҡа Бәндәбикә һәм Хөсәйенбәк кәшәнәләрен тәҡдим итеүселәр ҙә булды. Ул кәшәнәләр хәҙерге көндә тышы бар, эске биттәре юҡ китап һымаҡ, сөнки изгеләрҙең һөйәктәрен бер ғалимыбыҙ ҡаҙып алып, ҡайҙалыр тапшырған, алмашҡа академик исеме алды. Ғөмүмән, ҡәберлектәрҙе һаҡлау тураһында күптән закон сығарырға ваҡыттыр, тип уйлайым. Юғиһә, берәй аҡыллы баш феномен, тикшерәм, тип, Мөжәүир хәҙрәттең ҡәберенә лә экспедиция алып килмәç, тимә.

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ (Баймаҡ районы).**

ИНТЕРНЕТТАН

## СИТ ИЛДӘН КИЛГӘНДӘР...

### ни яғы менән хәүефле?

● РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы зарарлы етештереү урындарында эшләүсе эшселәрҙе бушлай һөт менән тәьмин итеү нормаһын һәм шарттарын раҫлаған бойороҡҡа үҙгәрештәр индерҙе. Хеҙмәт кодексына индерелгән төҙәтеүҙәргә ярашлы, эшсе үҙенә тәғәйенләнгән һөт продукцияһы урынына аҡсалата компенсация алырға хоҡуҡлы. Эш биреүсе тарафынан компенсация айына бер тапҡыр түләнә. Зарарлы производствола эшләүселәргә сменаһына 0,5 литр һөт бирелә. Һөт 500 грамм кефир, ҡатыҡ, ряженка йәки йогурт менән дә алмаштырылыуы бар. Бынан тыш, һөт 9 процент майлылыҡтағы 100 грамм эремсек йәки 24 процент майлылыҡтағы 60 грамм сыр менән дә алыштырыла ала.

● Мәскәүҙә "Һаулыҡ һәм тәмәке" тип исемләнгән II Бөтә Рәсәй милли форумы асылды. Быйыл икенсе тапҡыр уҙғарылған былдай киң ҡоласлы сараның ойоштороусылары булып Дәүләт думаһы, Рәсәй Медицина фәндәре академияһы, Роспотребнадзор, Һаулыҡ һаҡлау буйынса Бөтә донъя ойошмаһы һәм башҡалар сығыш яһай.

Форум Рәсәйҙә тәмәке тартыуҙың закон, сәйәсәт һәм фәнни мәсьәләләренә, илебеҙҙең сәләмәт тормош рәүеше өсөн бөтә донъя хәрәкәтенә ҡушылыуына һәм "Тәмәкегә ҡаршы көрәш буйынса Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы конвенцияһына ҡушылыу тураһында"ғы законды тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләренә арнала. Был мөһим сарала медицина өлкәһендәге төп белгестәр, билдәле сәйәсмәндәр, бөйөк спортсылар, бер һүҙ менән әйткәндә, ҡыҙыҡһынған бар кешеләр ҡатнаша.

● РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы яҡын арала медицина күрһәтеүҙәре буйынса Рәсәй биләмәһендә булыуы хуп күрелмәгән сит ил граждандары хаҡында бойороҡ сығарырға йыйына.

" Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө көндә Рәсәйгә эшкә килгән сит ил гражданы үҙенең һаулыҡ торошо, наркомания менән шөғөлләнмәүе, енси юл менән йоға торған сире булмауы хаҡында белешмәне эшкә рөхсәт алғандан һуң бер ай үткәс кенә килтерә, - тип һөйләй министрлыҡтың Хеҙмәт һәм эш менән тәьмин итеү департаменты директоры урынбаҫары Г. Гаденко. - Урындағы халыҡ өсөн хәүефле булған сирҙәрҙе асыҡлауҙың берҙән-бер юлы әлеге белешмәләргә ҡайтып ҡала". Шул уҡ ваҡытта, рәсми мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, сит илдәрҙән килгән кешеләрҙең 15 проценты ниндәй ҙә булһа хәүефле инфекция йөрөтөүсе булып сыға.

● Рәсәйләр үҙ эштәрен башлап ебәреү өсөн 60 мең һум аҡса алыу мөмкинлегенә эйә хәҙер. Рәсәй Хөкүмәте эшһеҙлек буйынса пособиеның йыллыҡ күләмен билдәләне. Уны кеше эшкыуарлыҡ шөғөлөн башлап ебәргән осраҡта алырға мөмкин.

2008 йылдың декабрендә РФ хөкүмәте эшһеҙ ҡалған рәсәйлеләрҙең үҙ шөғөлөн асып ебәреү теләге булған хәлдә стажына ярашлы йылына бер тапҡыр түләнә торған эшһеҙлек буйынса пособиены алыу мөмкинлеге хаҡында ҡарар ҡабул иткәйне. Иҫәп-хисап пособиеның иң аҙ күләменән дә (850 һум), иң юғары күләменән дә (4,9 мең һум) сығып башҡаралыуы ихтимал. Хөкүмәттең һуңғы ҡарарына ярашлы, 12 тапҡыр арттырылған пособие күләме хәҙер буласаҡ эшҡыуарға иң юғары күләмдән сығып иҫәпләнә һәм 60 мең һум самаһы тәшкил итә.

СОБХАНАЛЛА!

# ӨМӨТҺӨҘ АУЫРЫУҘА...

## өмөт уята яңы Үҙәк

Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында ҡыуаныслы ваҡиға булып үтте: уның нигеҙендә Республика Гематология үҙәге асылды.

Гематология - ҡан тамырҙары төҙөлөшө һәм эше, ҡан ауырыуҙары сәбәптәрен һәм үҫеш механизмы өйрәнеүсе, был сирҙе асыҡлау, дауалау һәм иҫкәртеү ысулдарын эшләүсе фән ул.

Төбәктә гематология үҙәге булдырыу күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә ине инде. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының баш табибы Ринат Нагаев һүҙҙәренә ҡарағанда, һуңғы ун йылда донъяла, шул иҫәптән Башҡортостанда, онкология сире менән яфаланыусылар һаны артҡандан-арта бара. Мәҫәлән, беҙҙең республикала ғына йыл һайын лейкоздың 450-нән ашыу тәүге осрағы теркәлә.

Бынан бер 15 йыллап элек "яман шеш", "лейкоз", "лимфома" тигән һүҙҙәр беҙҙә хөкөм һымаҡ ҡабул ителә ине. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә сирлеләрҙең яртыһы самаһын дауалап һауыҡтыралар, ә ҡайһы бер кли-



никаларҙа был күрһәткес донъялағы иң яҡшы һөҙөмтәләргә яҡынлаша.

- Башҡортостанда быдай үҙәкте асыу ҡан ауырыуҙары менән сирләүселәр араһында иҫән ҡалыусылар һанын арттырырға мөмкинлек бирәсәк, - ти Республика клиник дауаханаһының баш табибы Ринат Нагаев. - Үҙәк 50 урынға иҫәпләнгән, бынан тыш, стерилләнгән айырым өс бүлмәнән торған махсус блок һәм ике тиҙләтелгән дауалау палатаһы буласаҡ.

Республика Гематология үҙәге буш урында барлыҡҡа килмәне. Быға тиклем Ҡыуатов исемендәге дауахана нигеҙендә оҙаҡ йылдар гематология бүлеге эшләне, ул сирлеләргә стационар-поликлиника кимәлендә мөмкин тиклем ярҙам күрһәтеп килде. Ошо бүлек аша йыл һайын меңәрләгән ауырыу үтә ине. Бында лейкоздарҙы дауалауға йүнәлтелгән заманса дауалау ысулдары уңышлы файҙаланылды. Ләкин, нисек кенә булмаһын, уны Республика Гематология үҙәге бирәсәк мөмкинлектәр менән сағыштырып булмаясаҡ, әлбиттә. Үҙәкте асыу ауырыуҙар өсөн урындар һанын арттырыуҙан тыш, матди-техник базаны нығытыу, шул иҫәптән ҡиммәтле ҡорамалдар һатып алыуға булышлыҡ итте.

2008-2009 йылдарҙа Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының гематология бүлеген ҡайтанан үҙгәртеп ҡороу эше башҡарылды. Был иһә республика ҡаҙнаһынан өҫтәмә аҡса бүлеү, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының финанс ярҙамы арҡаһында бойомға ашырылды.

- Республика Гематология үҙәген асыу гематология, трансфузиология һәм молекуляр биология менән бәйле оҙайлы программаның төп йүнәлештәрен үҫтереүгә быға тиклем булмаған кимәлдә мөмкинлектәр бирә, - тип һөйләй баш врач. - Проекттың дөйөм хаҡы 11 миллион 620 мең һум тәшкил итте. Өҫтәүенә, 2009 йылда БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡан ауырыуҙары менән яфаланыусыларҙы дауалау өсөн ҡиммәтле медикаменттар һатып алыуға тағы ла 12 миллион һум аҡса бүлдe. Быйылғы йылдың икенсе яртыһынан был Үҙәктә ауырыуҙарға юғары дозала химия терапияһы үткәрелә башлаясаҡ.

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# БУЛАСАҠ АРТИСТАР...

## Төркиәлә һынау тотто

**Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының театр факультеты студенттары 25-28 майҙа йәштәр сәйәсәте өлкәһендәге халыҡ-ара программа сиктәрендә Төркиәнең Стамбул ҡалаһына сәфәр ҡылды. Унда улар Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы буйынса "Донъяның ярҙары икәү" спектакле менән уңышлы сығыш яһап, бик бай тәьҫораттар алып ҡайтты. Сәйәхәт хаҡында курстың художество етәксеһе, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисткаһы, профессор Таңсулпан БАБИЧЕВА һөйләй:**

- Беҙҙең дәүләт имтихандары Төркиәнән башланды, тип әйтһәк, яңылыш булмаҫ. Үҙебеҙҙең сәхнәлә уйнау - бер, ә бөтөнләй ят мөхиттә сит тамашасы алдында һынау тотоу күпкә ҡатмарлы. Студенттар был имтиханды яҡшы башҡарып сыҡты. Беҙ унда Мостай Кәримдең визит карточкабыҙға әүерелгән "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы буйынса ҡуйылған "Донъяның ярҙары икәү" спектакле менән сығыш яһаныҡ. Беҙ был спектакль менән "Театр яҙы" фестивалендә ҡатнашып, Мәскәү тәнҡитселәре тарафынан юғары баһаға лайыҡ булғайныҡ. Ошо спектаклде ҡарағандан һуң, Башҡортостандың Төркиәләге вәкиле Ҡоншулбей Мизиев беҙҙе Төркиәгә саҡырҙы. Беҙ алдан һөйләшеүҙәр алып барып, Мимар Синан исемендәге Гүзәл сәнғәттәр университеты ректоры Аҡсунғур Рахми саҡырыуы буйынса сәйәхәткә юлландыҡ. Делегацияны ректорыбыҙ Ишмөхәмәт Ғәйнетдин улы Ғәләүетдинов етәкләне. Унда беҙ был университет менән артабан уҡытыу алымдары менән уртаҡлашыуҙы, рәссамдарҙың күргәҙмәһен ойоштороуҙы, музыканттарҙың әҫәрҙәрен башҡарыуҙы һәм спектаклдәр менән сығыш яһауҙы үҙ эсенә алған килешеү төҙөнөк. Иртәгәһенә үҙебеҙ алып барған спектакль менән сығыш яһаныҡ. Беҙҙең тамашаны ҡарарға Стамбулда йәшәгән милләттәштәребеҙ, татар халҡы, Анкаранан "Төрксой" вәкилдәре һәм Зәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә ханым килде. Әйтергә кәрәк, беҙ тәржемәһеҙ саф башҡорт телендә уйнаныҡ һәм улар беҙҙе аңлап, ихлас алҡышлап, яратып ҡарап ултырҙы. Сөнки беҙҙең спектакль ҡоро һүҙ һөйләүгә ҡоролмаған, унда хәрәкәткә, ғәмәл башҡарыуға төп баҫым яһала, тамаша көсөргәнешле хис-тойғолар оҙатыуында бара, быны аңламау мөмкин түгел. Сығышыбыҙҙың икенсе өлөшөндә концерт ҡуйҙыҡ. Унда башҡорт халыҡ йырҙары, бейеүҙәре башҡарҙыҡ, спектаклдән өҙөктәр күрһәттек. Программаны Ләйсән Мәзитова менән Шәһит Хамматов башҡорт телендә, ә Егор Сурганов тигән егетебеҙ төрөк телендә алып барҙы. Уның сәхнәгә һәр ҡабат сығыуы, төрөксә иғлан итеүе урындағы халыҡ тарафынан ҙур алҡыштар менән ҡабул ителде. Улар башта Егорҙы ятлап алып һөйләй, тип уйлағандар, аҙаҡ үҙе менән әңгәмәләшкәндән һуң, уның төрөк телен яҡшы белеүен күреп хайран ҡалдылар. Шулай уҡ ике студентыбыҙ Гөлназ Вәлитова менән Наил Сырлыбаев төрөк телендә "Мине онот" һәм "Аҡ диңгеҙ" тигән хитҡа әйләнгән йырҙар башҡарҙы. Был сығыштар иң йәнлеһе булғандыр, залда ултырыусы төрөк студенттары уларҙы дәррәү күтәреп алып, ҡушылып йырлап ултырҙы. Аҙаҡтан Төркиә һәм башҡорт йәштәре бергәләшеп фотоға төштө, яҡындан аралашты, туғандарса мөнәсәбәт булдырып, дуҫлыҡ күперенә юл һалды. Бындай аралашыуҙар йәштәр өсөн кәрәкле һәм фәһемле, тип уйлайым. Төрөк студенттары беҙгә көҙгә киләсәк. Шулай итеп, беҙҙең курс театр факультеты тарихында тәүге тапҡыр сит илгә сығып сығыш яһап ҡайтыу бәхетенә өлгәште. БР Спорт, туризм һәм йәштәр сәйәсәте буйынса министрлығына беҙҙең сәйәхәтте ойоштороуҙа ҙур ярҙам күрһәткәне өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Сит илгә сығыу, бүтән милләттең мәҙәниәте менән танышыу, бигерәк тә сәнғәт кешеһендә, донъяға ҡарашты киңәйтә, күңелде байыта, илһам бирә. Был тәьҫораттар студенттарға профессиональ театр сәхнәләрендә тырышып эш башларға, ижади һәләттәрен үҫтерергә ҙур этәргес көс буласаҡ.

**Шулай итеп...**

**Ҡулдарына диплом алған 15 студент республикабыҙҙың төрлө театрҙарына артист һөнәренә хеҙмәт итергә юл ала. Уларға алған белемдәрен, ижади һәләттәрен тулыһынса файҙаланып, сағыу образдар тыуҙырып, башҡорт театр сәнғәтенең данын арттырыуҙа үҙ өлөштәрен индереүҙәрен теләп ҡалабыҙ.**

**Динара ИШБУЛАТОВА яҙып алды.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТАШТАР ҘА...

## өнһөҙ генә һабаҡ бирергә мөмкин

**Шундай риүәйәт:** "Үҙ һүҙенә тоғролоғо менән дан алған Мәхмүт солтан бер саҡ ҡала урамдары буйлап сығып китә. Шул саҡ ул бәләкәй арбаға ҙур таш тейәп, уны көскә тартып килгән бер кешене күреп ҡала. "Яфаланма улай, ташла ташыңды!" тип бойора был кешегә Мәхмүт солтан. Арба тартып килеүсе кеше был таштың юл уртаһында ятыуы, хәрәкәткә ҡамасаулауы тураһында әйтергә тип ауыҙ аса, әммә солтан уға асыуланып ҡысҡыра: " Һин үҙеңдең хакимыңдың бойорғанына ҡаршы килергә батырсылыҡ итәһеңме? - ти ул. - Ташла ташыңды, ул ошонда мәңге ятырға тейеш. Минең бойороғом - ошо!" Арба һөйрәп килеүсе ташты шунда уҡ бушата һала. Солтан үҙенең ярандары менән артабан китә, ә таш барыһына ла ҡамасаулап, юл уртаһында ятып ҡала. Ташты берәү ҙә алып ташларға батырсылыҡ итмәй, сөнки уның ошонда ятыуы солтан бойороғо менән нығытылған бит. Солтандың вәзирҙәре уға был ташты алып ташлау тураһындағы һорау менән мөрәжәғәт итеп ҡарай. Әммә солтан:" Мин үҙ бойороҡтарымды үҙгәртмәйем. Әгәр ҙә хаким үҙ күрһәтмәһен үҙгәртһә, ул саҡта һеҙ бит был ҡарар осраҡлы ғына ҡабул ителгән, тип уйлаясаҡһығыҙ", - тип ҡырт киҫә. Солтан Мәхмүт донъя ҡуйғандан һуң да яңы вариҫ, вәзирҙәр хакимдарҙың ихтыярын хөрмәт итергә тейеш, тигәндән сығып, үҙенә тиклемге хакимдың бойороғон ғәмәлдән сығарырға йөрьәт итмәй. Шулай тиҫтәләгән йылдар үтә. Был ваҡыт эсендә ҡалала бер нисә хаким алышына. Ҡала үҫешә. Ә теге таш хәрәкәткә ҡамасаулап, йәйәүлеләргә лә, һыбайлыларға ла, йөклөләргә, карауандарға ла ҡамасаулап, һаман да юл уртаһында ята бирә.

Бер саҡ юл уртаһында ятҡан ташҡа ҡарай-ҡарай, был тирәнән бер уҡытыусы үҙенең бик аҡыллы уҡыусыһы менән үтеп бара. Улар йөк тейәгән ике арбаның ошо таш эргәһенән үткәндә бер-береһенә эләгешеп, ысҡынып китә алмай ыҙаланыуын күҙәтә. Бына бер арбалағы ат өркөп, артҡы аяҡтарына үрәпсеп баҫа, шунда эргәләге сауҙа киоскыһы емерелеп төшә, ундағы ҡауындар юл буйлап тәгәрәп китә. Ҡауындарға эләгеп, бер кеше йығыла, икенсеһе, өсөнсөһө... Ишәктәр ҡысҡыра, аттар кешнәй, кешеләр ҡысҡырышып әрләшә, дөйәләр юлдан ситкә сығып өйөлөшә..."Уҡытыусым, - тип һүҙ башлай уҡыусы. - Ни өсөн ошоға тиклем был ташты берәү ҙә ситкә алып бырғатмаған?" "Был таш киләһе быуындарға һабаҡ булып ята бирә. Барыһы ла ул таштың солтан Мәхмүт бойороғо буйынса ошонда ятҡанын белә. Хәҙер был таш киләһе хакимдарға ла, ябай кешеләргә лә "Хакимдарҙың бойороғон ғәмәлдән сығарыу мөмкин түгел", йәғни хаким бер ҡасан да үҙ ҡарарын үҙгәртергә тейеш түгел, тигәнде раҫлау булып тора. Таш, халҡына зыян килтермәҫ өсөн, хаким үҙенең бойороҡтарын уйлап бирергә тейеш, тигәнгә лә ишара ул. Таш шулай уҡ, хакимдың бойороҡтары дөрөҫ булмағанда ла уның вәзирҙәре был бойороҡто үтәмәҫкә тейеш түгел, юҡһа, бойороҡто ғәмәлдән сығарыу хакимдың уйлап ҡарар ҡабул итеү һәләтенә ышанмау тыуҙырасаҡ, тигәнгә лә ишаралай. Тимәк, шундай һығымта яһайыҡ: таш ошонда тейелгеһеҙ булып ятҡанда, ниндәйҙер уйҙарға этәрә. Ваҡыты-ваҡыты менән уйланып алыуҙан да файҙалыраҡ һәм әһәмиәтлерәк нәмә булыуы мөмкинме һуң?!"

"Һин, һәр ваҡыттағыса, хаҡлыһың, уҡытыусым, - ти уҡыусы. Ә шулай ҙа был хәлгә түҙеп тора алмаған хаким табылып, ташты юлдан алып ташларға бойорһа, нимә булыр? Ул саҡта был хакимдың вариҫтарына һәм вәзирҙәренә уйланыр сәбәп ҡалмаҫмы икән ни?" "Әлбиттә, ниндәйҙер буш урын да уйланыуға сәбәп була ала,- тип яуаплай уҡытыусы. - Бәлки, был буш урында борон-борон заманда бер таш ятҡандыр? Был уйландырыу сәбәбе була алмаймы ни?" "О, уҡытыусым, - ти уҡыусы. - Мин әлеге ваҡытта китап яҙам. Әгәр ҙә мин ул китабымда бер битте таҙа көйө ҡалдырһам, һеҙ ҡаршы килмәҫһегеҙме?.."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6066
Заказ 2274